МИНИСТЕРСТВО НАУКИ И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
СТЕРЛИТАМАКСКИЙ ФИЛИАЛ
ФЕДЕРАЛЬНОГО ГОСУДАРСТВЕННОГО БЮДЖЕТНОГО ОБРАЗОВАТЕЛЬНОГО УЧРЕЖДЕНИЯ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«УФИМСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ НАУКИ И ТЕХНОЛОГИЙ»
(СФ УУНиТ)

# ПРОГРАММА

вступительных испытаний, проводимых вузом самостоятельно,
для поступающих на направление подготовки бакалавриата
44.03.05 Педагогическое образование (с двумя профилями подготовки),
программы: «Родной (башкирский) язык и литература, Иностранный язык»;
«Родной (башкирский) язык и литература, Русский язык»

## Аңлатма яҙыу

Тәҡдим ителгән программа башҡорт филологияһы һәм төркиәт факультетына уҡырға инеүселәргә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән вузда үткәрелгән һынауға маҡсатлы рәүештә әҙерләнергә ярҙам итеү өсөн төҙөлдө.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән ҡабул итеү имтиханын үткәреүҙең төп маҡсаты – уҡырға инеүселәрҙең филологик әҙерлеген, мәктәптә алған белем кимәлен тикшереү. Программаға башҡорт тел һәм әҙәбиәт ғилеменең мәктәп курсында уҡытылған бөтә кимәлдәре лә индерелгән. Әҙерлек барышында абитуриенттар башҡорт теленең фонетикаһы, лексикаһы, һүҙьяһалышы, морфологияһы, синтаксисы һәм башҡорт әҙәбиәте тарихының бар осорҙары буйынса алған белемдәрен системаға һалырға, тәрәнәйтергә һәм камиллаштырырға тейеш.

Башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән имтиханды үткәреүҙең формаһы – яҙма. Уҡырға инеүселәр билдәләнгән ваҡыт эсендә башҡорт тел һәм әҙәбиәт ғилеменең бөтә кимәлдәрен дә үҙ эсенә алған тест һорауҙарына яҙма рәүештә яуап бирә.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ПРОГРАММА

### *Тел тураһында дөйөм төшөнсә*

Телдең ижтимағи һәм социаль күренеш булараҡ асылын, тәбиғәтен аңлау. Тел – кешеләр araһында аралашыу, хәбәрләшеү сараһы ғына түгел, ә, бөтәһенән дә элек, халыҡ мәҙәниәтенең, халыҡ күңеленең һәм психологияһының мөһим бер өлөшө. Тел – халыҡтың тормошо, тарихы менән туранан-тура бәйле күренеш.

Хәҙерге тел – ул тарихтың бөгөнгө көҙгөһө, уның буйынса халыҡтың киләсәген тойомлап була. Телһеҙ, тел сараларыһыҙ аралашып, аңлашып булмай. Телһеҙ шәхестең, кешелек йәмғиәтенең, фәндең, техниканың, мәҙәниәттең үҫеше мөмкин түгел. Телдең әһәмиәте, кәрәклеге, уны яҡшы белеү ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл иткәндә мөһим булыуы башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә, әйтемдәрендә сағылған.

Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Уның тамырҙары бик тәрәндә: тәүге мәғлүмәттәрҙе беҙҙең эраға тиклем V быуатҡа ҡайтарып ҡалдыралар ғалимдар.

Башҡорт әҙәби теле үҙенең грамматик, фонетик, лексик һәм дөрөҫ һөйләү йәһәтенән билдәле бер тәртипкә һалыныуы менән милли телдең иң юғары формаһы һанала. Башҡорт теле үҙенең грамматик төҙөлөшө, һүҙлек составы менән төрки телдәр ғаиләһенә ҡарай. Ул әзербайжан, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, ҡумыҡ, алтай, ҡараим, сыуаш, татар, яҡут, тува, төрөкмән, шор, тофалар, хакас, ғағауз, уйғыр, үзбәк телдәренә ҡәрҙәш һанала. Телдең ҡәрҙәшлеге уларҙың төп һүҙлек фондына ҡараған тамыр һүҙҙәрҙә һәм грамматик төҙөлөшөндә тарихи яҡтан дөйөмлөк булыу менән билдәләнә. Төрки телдәре үҙҙәренең эсендә, үҙ-ара яҡынлыҡтарына ҡарап, төркөмсәләргә бүленәләр. Башҡорт теле татар, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ, нуғай, ҡумыҡ, ҡарасай, балҡар, ҡараим телдәре менән бергә ҡыпсаҡ төрки телдәре төркөмсәһенә ҡарай. Ул телдәрҙә һөйләшеүселәр бер-береһен бик еңел аңлайҙар. Бының сәбәбе шунда: ул халыҡтарҙың боронғо замандарҙан бирле территориаль яҡтан яҡын, эргәләш йәшәүе арҡаһында телдәрендә дөйөмлөк күберәк һаҡланған һәм үҙгәрештәр ҙә бер йүнәлештәрәк булған. Шулар араһынан башҡорт теленә иң яҡыны – татар теле.

Башҡортостан Республикаһынан тыш, башҡорт телендә Ырымбур, Һамар, Һарытау, Силәбе, Ҡурған, Пермь, Свердловск, Төмән өлкәләрендә, Татарстан, Үзбәкстан, Төркмәнстанда, Яҡут (Саха), Удмурт республикаларында, Көнбайыш

Ҡаҙағстандың ҡайһы бер район һәм ауылдарында йәшәгән башҡорттар һөйләшә. Бынан тыш, үҙ телен, рухын онотмаған башҡорттар Венгрияла, АҠШ-та һ.б. илдәрҙә лә йәшәй. Башҡорт телен Венгрияла, Германияла, АҠШ-та өйрәнәләр. Американа башҡорт теле буйынса һүҙлек сыҡҡан.

Телдең үҫешен, ҡулланылышын, структураһын (төҙөлөшөн) өйрәнеүсе фән булараҡ тел ғилеменең (лингвистиканың) төрлө тармаҡтары бар, шуларҙың мәктәптә өйрәнелгәндәренән түбәндәгеләрҙе күрһәтергә мөмкин:

– фонетика – телмәр өндәрен, уларҙың бүленешен, телдә үҙгәрешен тикшерә;

– орфоэпия – дөрөҫ әйтелеш, һөйләү ҡағиҙәләрен һәм уларҙың нормаларын билдәләй;

– орфография – дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен өйрәнә;

– лексикология – төрлө яҡлап һүҙлек байлығын өйрәнә;

– фразеология – тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙе тикшерә;

– морфология – һүҙ төҙөлөшөн, һүҙ төркөмдәрен өйрәнә;

– синтаксис – һөйләм төҙөлөшөн тикшерә, уларҙың төрлө законлыҡтарын аса;

– пунктуация – яҙма телмәрҙә тыныш билдәләренең дөрөҫ ҡуйылышын тикшерә.

### *Лексика. Фразеология*

Хәҙерге башҡорт телендә ҡулланылған бөтә һүҙҙәр, төп башҡорт һүҙҙәре һәм төрлө телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр, шулай уҡ яңғыҙлыҡ исемдәр, йәғни исем – фамилиялар, ауыл, ҡала, ер-һыу, тау, китап, журнал исемдәре, хайуандарға бирелгән исемдәр – бөтәһе лә башҡорт теленең һүҙлек составын тәшкил итә. Лексиканың төп берәмеге – һүҙ. Һүҙҙең грамматик һәм лексик мәғәнәһе була. Мәғәнәләре буйынса һүҙҙәрҙе тематик яҡтан төркөмләргә мөмкин, мәҫәлән, ҡылымдар – хәрәкәт ҡылымдары, фекерләү ҡылымдары, телмәр ҡылымдары, эшмәкәрлек ҡылымдары, хис-тойғо ҡылымдары. Башҡорт телендә күп һүҙҙәр тик бер генә мәғәнә белдерә. Улар **бер мәғәнәле һүҙҙәр** тип атала: *китап, дәфтәр, күҙ, ҡыш*. Ә ҡайһы бер һүҙҙәр бер нисә мәғәнә аңлата. Улар **күп мәғәнәле һүҙҙәр** тип йөрөтөлә: *ауыр мәсьәлә, ауыр йөк, ауыр уй, ауыр тормош.* Күп мәғәнәлелектең бер тибы – метафора. Метафора – күсереү тигән һүҙ. Метафорала һүрәтләнгән күренештәр, предметтар икенсе күренеште йәки предметты бирә торған һүҙ менән әйтелә, шуға ла эҫәрҙә һөйләнелгән предметҡа күркәмлек биреү өсөн әҙәбиәттә киң ҡулланыла, мәҫәлән:

Елдәренә уның *йүгән* һалдыҡ,<br>Ҡырҙарында *алтын* үҫтерҙек (Р.Бикбаев).

Башҡорт телендә ҡайһы бер һүҙҙәр **тура мәғәнәлә һәм күсмә мәғәнәлә** ҡулланыла. Һүҙ тура мәғәнәһендә ҡулланылғанда кешенең аңында шул һүҙ белдергән төшөнсә сағыла, мәҫәлән, *ҡуян* – ҡыр хайуаны. Күсмә мәғәнәһендә был һүҙ ҡурҡаҡлыҡты белдерә (*ҡуян* – ҡурҡаҡ кеше, сөнки ҡуяндың төп сифаты – ҡурҡаҡлыҡ).

Мәғәнәләре буйынса бер-береһенә яҡын һүҙҙәр **синонимик рәткә** берләшә: *матур, һылыу, сибәр, зифа, гүзәл.* Ләкин был һүҙҙәр мәғәнә нескәлектәре йәки стилистик биҙәге менән айырылалар. Шуға күрә улар күп осраҡта бер-береһен алмаштырып та килә алмаҫҡа мөмкин. Әҙәбиәттә синонимдарҙың тейешлеһен һайлап алыу һәм улар менән күренештәрҙе тулыраҡ һынландырыу ҙур роль уйнай. Синонимдар телмәрҙә, стилдең бер сараһы булараҡ, телдең мөһим байлығы итеп ҡарала. Әйтергә теләгән уйҙы, фекерҙе теүәл, матур һәм яғымлы итеп әйтеп биреү, хәл-ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе төрлө яҡлап һүрәтләү өсөн туған телебеҙҙең был байлығын тулыһынса файҙалана белергә тейешлебеҙ. Ҡапма-ҡаршы мәғәнә аңлатҡан һүҙҙәр **антоним** тип атала: *аҡ – ҡара, йылы – һыуыҡ, яҡшы – насар*. Антонимдар һәр саҡ парлы (икәү) була. Бөтә һүҙҙәрҙең дә антонимы булмаҫҡа мөмкин, мәҫәлән: *сәс, китап, йәшел*. Әйтелештәре һәм

яҙылыштары бер төрлө булып та, төрлө мәғәнә аңлатыусы һәм килеп сығышы менән төрлө сығанаҡтан булған һүҙҙәр **омоним** тип атала, мәҫәлән: *ял – ат ялы, ял – эштән һуң ял итеү.*

**Килеп сығышы яғынан** башҡорт теленең һүҙлек составын ике ҙур төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин: **төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр.** Төп башҡорт һүҙҙәре эсендә дөйөм төрки сығанаҡлы һүҙҙәрҙе (*атай, инәй, ҡояш, һүҙ* һ.б.) һәм башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрен (*ағас, аҡыл, ат, баш, сәс* һ.б.) ҡарайбыҙ. Был һүҙҙәр башҡорт теленең тел ҡалыптарына тулыһынса буйһона, тел нормалары буйынса үҙгәрә, мәҫәлән, улар сингармонизм законын эҙмә-эҙ һаҡлай, был һүҙҙәрҙең ижектәре ҡуш тартынҡыларға башланмай һ.б.

Башҡорт теленә башҡа телдәрҙән килеп ингән яңы төшөнсәләр, яңы һүҙҙәр үҙләштерелгән һүҙҙәр тип атала. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе өс төркөмсәгә айырырға мөмкин: ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр, фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр, рус теленән һәм рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәр. Ғәрәп теленән ингән һүҙҙәр дин, уҡыу-уҡытыу, тәрбиә эше менән бәйле: *дин, ваҡиға, ғилем, китап, мәҡәлә, мәктәп.* Фарсы теленән сауҙа менән бәйле һүҙҙәр, ҡайһы бер көнкүреш әйберҙәре атамалары килеп ингән: *баҙар, таҫтамал, келәм.* Был һүҙҙәрҙең күбеһе боронғо замандарҙа уҡ килеп ингәнлектән башҡорт һүҙенә тулыһынса тиерлек оҡшап киткәндәр, йәғни башҡорт теленең фонетик закондарына тулыһынса буйһонғандар. Рус теленән һәм рус теле аша ингән һүҙҙәр эсендә рус теленән, шулай уҡ грек, инглиз, итальян, латин, немец, француз һ.б. сығанаҡлы һүҙҙәр тикшерелә. Һуңғылары башҡорт теленә рус теле аша килеп ингәндәр. Бындай һүҙҙәрҙе ике осорға бүлеп ҡарарға мөмкин: 1) 1917 йылға тиклем үҙләштерелгән һүҙҙәр; 2) 1917 йылдан һуң үҙләштерелгән һүҙҙәр.

Тәүге төркөмсәгә ҡараған һүҙҙәр, нигеҙҙә, һөйләү телмәре аша үҙләштерелгән һәм башҡорт һүҙҙәренә яраҡлаштырылған: *бүрәнә, өҫтәл, арыш*. Икенсе төркөмсәгә ҡараған һүҙҙәр телебеҙгә яҙма телмәр аша килеп ингән. Улар тәү телдәге яңғырашын, баҫымын, яҙылышын һаҡлаған: *л'агерь, ф'актор, зав'о<u>д</u>, космон'<u>авт</u>, уд'арник, сл'есарь* һ.б.

**Ҡулланылышы буйынса** башҡорт теленең лексикаһы **актив һүҙҙәр ҡатламына һәм пассив һүҙҙәр ҡатламына** айырып тикшерелә. Телмәрҙә йыш ҡулланылыусы һүҙҙәр кешеләрҙең ҡайҙа йәшәүе, нимә менән шөғөлләнеүе, йәше, енесе менән бәйле булмай, ул һүҙҙәр башҡорттар йәшәгән төрлө ерҙәрҙә бер дәрәжәлә ҡулланыла: *әсәй, икмәк, сәй, сынаяҡ, баш, ҡул, кейем, бүрек, аҡ, ҡара, йылы, яҡты* һ.б. Сикләнгән ҡулланылышлы һүҙҙәргә терминдар, иҫкергән һүҙҙәр, тарихи һүҙҙәр, кәсеп-һөнәр һүҙҙәре, яңы һүҙҙәр, диалектизмдар ҡарай. Уларҙың күбеһе шул ҡатлам йәки урын өсөн актив була, мәҫәлән, кәсеп-һөнәр һүҙҙәре ошо һөнәр кешеләре өсөн, диалектизмдар ошо диалект өсөн актив һүҙҙәр. Әммә дөйөм тел кимәлендә был һүҙҙәрҙең ҡулланылышы сикләнгән. Уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китергә кәрәк.

Һәр тел яңы һүҙҙәр менән даими байый. Яңы һүҙҙәр тормошта булып торған төрлө хәл-ваҡиғалар менән бәйле. Улар ваҡытлы күренеш: тора-бара ул йә актив телмәргә, йә башҡа төркөмсәгә, мәҫәлән, тарихи һүҙҙәр рәтенә, күсә. Миҫалға ‘*ваучер*’ тигән һүҙҙе алайыҡ. 90-сы йылдарҙа барлыҡҡа килгән был яңы һүҙ бөгөн иҫкергән һүҙгә әйләнде, сөнки был төшөнсә лә, һүҙ ҙә хәҙер юҡ.

Башҡорттар йәшәгән айырым төбәктәрҙә генә ҡулланылған һүҙҙәр диалектизмдар тип атала. Башҡорт теленең өс диалекты бар: көньяҡ диалект, көнсығыш диалект һәм төньяҡ-көнбайыш диалект. Һәр диалект һөйләштәрҙән тора.

| **көньяҡ диалект** | **көнсығыш диалект** | **төньяҡ-көнбайыш диалект** |
|---|---|---|

| | | |
|---|---|---|
| дим һөйләше | әй һөйләше | ҡариҙел һөйләше |
| урта һөйләш | миәс һөйләше | танып һөйләше |
| эйек-һаҡмар һөйләше | ҡыҙыл һөйләше | түбәнге-ағиҙел – ыҡ һөйләше |
| | арғаяш һөйләше | ғәйнә һөйләше |
| | салйоғот һөйләше | |

Бындай бүленеш территориаль күҙлектән, шулай уҡ тел үҙенсәлектәренән сығып үткәрелә. Был осраҡта телдең фонетик, морфологик һәм иң элек лексик айырмалыҡтары иҫәпкә алына, мәҫәлән, көнсығыш диалектта – *'йоҡтай'* (*йоҡлай*), *'ярҙы'* (*ярлы*); көньяҡ диалектта – *'ҡаҙлар'* (*ҡаҙҙар*), *'бесәннек'* (*бесәнлек*); төньяҡ-көнбайыш диалектта – *'чирәм'* (*сирәм*), *'сүлек'* (*һөлөк*). Һуңғы осорҙа диалекталь лексиканың әҙәби тел һүҙҙәре менән алмаштырылыуы, йәғни әҙәби телдең тормоштоң төрлө тармағында киң таралыуы күҙәтелә. Был ыңғай күренеш әҙәби телдә сыҡҡан баҫмаларҙың, теле- һәм радиотапшырыуҙарҙың булыуы һәм иң элек, әлбиттә, башҡорт әҙәби теленең мәктәптәрҙә уҡытылыуы менән бәйле.

**Лексиканың стилистик ҡатламдары** тураһында һөйләгәндә һүҙҙең экспрессив-стилистик характеристикаға эйә булыуы күҙ уңында тотола. Бында иң элек нейтраль (битараф йәки стиль-ара) һүҙҙәр (*өй, урман, болот, күк, эшләү, уҡыу* һ.б.) ҡатламын күрһәтергә кәрәк. Был һүҙҙәр дөйөм ҡулланылышлы булып тора. Йәнле һөйләү стиленә ҡараған һүҙҙәр эсендә ябай телмәр лексикаһын (*шылдырыу, теттереү, абышҡа* һ.б.), тупаҫ лексиканы (*йыпырыу, һемереү, убыр* һ.б.), балалар телмәре һүҙҙәрен (*тәтәй, мәмәй, төпәй булыу* һ.б.) айырып күрһәтергә мөмкин. Яҙма телмәр лексикаһын китап стиле һүҙҙәренә (*нәүбәттәге, туғандаш, өҫтөнлөк, тәүтормош* һ.б.), юғары стиль лексикаһына (*остаз, әҙип, тәьҫир, шиғриәт* һ.б.), рәсми стиль һүҙҙәренә (*түбәндәге ҡул ҡуйыусылар, беренсе сиратта* һ.б.) бүлеп өйрәнеү бар. Экспрессив стилдәргә иһә юғары – патетик стиль һүҙҙәре (*яуҙаш, дандаш, ҡәберҙәш* һ.б.), түбәнһетеү-мыҫҡыллау стиле һүҙҙәре (*бәдбәхет, байғош, бахыр* һ.б.), ихтирам-әҙәп стиленә ҡараған һүҙҙәр (*һаумыһығыҙ, ханым, ҡәрендәш, туғаным* һ.б.), иркәләү стиле һүҙҙәре (*бәпесем, сабыйым, бәғерем, әсәкәйем* һ.б.), ихласлыҡ-шаянлыҡ стиле һүҙҙәре (*Малайҙарҙың шар(ы)фы – Кәзә йөнө арҡауы, Уйнамай ултырып ҡайта, малайҙарҙың ялҡауы* /таҡмаҡ/) ҡарай. Бынан тыш, ғалимдарҙың төрлө фән өлкәһендә тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәһен сағылдырыу өсөн ҡулланылған фәнни стилде күрһәтергә кәрәк. Фәнни стилдең үҙенә генә ҡараған жанрҙары бар: монография, фәнни мәҡәлә һәм китаптар, диссертациялар, белешмәләр, дәреслектәр һ.б. Уларҙа төрлө фәнгә ҡараған термин, атама һәм билдәләмәләр, ҡағиҙәләр күп була. Тимәк, әҙәби телмәр ижтимағи тормоштоң барлыҡ сфераһында ла бер төрлө генә ҡулланылмай. Тыңлаусының йәшенә, һөнәренә ҡарап, әйтер фекеребеҙҙе тулы, аңлайышлы еткерер өсөн, тейешле һүҙҙәрҙе, стилде һайлау мөһим шарт булып ҡала.

Лексикологияның айырым телдәге һүҙҙәрҙе барлау, туплау һәм төрлө типтағы һүҙлектәр төҙөү менән шөғөлләнгән бүлеге **лексикография** тип атала. Бөтә һүҙлектәрҙе ҙур өс төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин: аңлатмалы һүҙлектәр, тәржемәүи һүҙлектәр, энциклопедик һүҙлектәр.

*Аңлатмалы һүҙлектәр* бер телле була. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге 1993 йылда Мәскәүҙә нәшер ителә. Уның ике томында 55 000 һүҙ һәм фразеологик берәмек, шулай уҡ фән, техника, сәнғәткә һ.б. ҡараған махсус терминдар, диалекталь һәм иҫкергән һүҙҙәр тупланған. Уларҙың һәр береһенә аңлатма бирелгән, тейешле билдәләр ҡуйылған, әҙәбиәттән, халыҡ ижадынан, хәҙерге матбуғаттан миҫалдар килтерелгән. *Тәржемәүи һүҙлектәр* ике йәки өс

телле була. Бындай һүҙлектәрҙә һүҙҙәргә аңлатма бирелмәй, тик бер телдән икенсе телгә тәржемә ителә, мәҫәлән, «Русско-башкирский словарь», ике томда (Өфө, 2005), «Башҡортса-русса һүҙлек» (М., 1996). *Энциклопедик һүҙлектәрҙә* халыҡ тормошо, ил яҙмышы менән тығыҙ бәйле шәхестәр, күренекле кешеләр, шулай уҡ мөһим тарихи ваҡиғалар, даталар, күренештәр тураһында тулы белешмә бирелә. Был төркөмгә «Башҡортостан. Краткая энциклопедия» (Уфа, 1996) һәм уның башҡортса тәржемәһе, 2005-2011 йылдарҙа Өфөлә нәшер ителгән 7 томлыҡ "Башҡорт энциклопедияһы" ҡарай.

### *Фонетика. Графика. Орфография. Орфоэпия*

Фонетика тураһында төшөнсә. Телмәр ағзалары. Телмәр өндәре. Өндәрҙең яһалышы. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, улар араһында айырма.

Һуҙынҡы өндәр. Уларҙың һаны һәм классификацияһы.

| | Ҡалын һуҙынҡылар | Нәҙек һуҙынҡылар |
|---|---|---|
| Иренләшкән һуҙынҡылар | о, $о^{о}$, у | ө, ү |
| Иренләшмәгән һуҙынҡылар | а, ы, $ы^{й}$ | ә, и, э, е |

Төп башҡорт һүҙҙәрендәге һуҙынҡылар: а, ә, $о^{о}$, ө, у, ү, е, ы, и; рус теленән ингән һүҙҙәрҙәге һуҙынҡылар: о, $ы^{й}$, э. Һуҙынҡы өндәр өлкәһендәге үҙгәрештәр: редукция (*уйын – уйна*), элизия (*ҡара урман – ҡаруман*), протеза (*шляпа – эшләпә*), эпентеза (*бревно – бүрәнә*).

Тартынҡы өндәр системаһы. Уларҙың һаны һәм составы. Тауыш һәм шауҙың ҡатнашлығы буйынса тартынҡыларҙың бүленеше. Тартынҡыларҙың ассимиляцияһы (*ҡыҙҙар, эштәр*) һәм диссимиляцияһы (*алтын, эшләй*).

| | Парлы тартынҡылар | | | | | | | | Парһыҙ тартынҡылар | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Яңғырау тартынҡылар | б | д | г | ғ | в | ҙ | з | ж | | | | | | | |
| Һаңғырау тартынҡылар | п | т | к | ҡ | ф | ҫ | с | ш | щ | х | һ | ц | ч | | |
| Сонор (талғын) тартынҡылар | | | | | | | | | й | н | ң | л | м | р | V |

Башҡорт телендә сингармонизм законы. Уның төрҙәре: ирен гармонияһы (*тормош – тормошобоҙҙо*), аңҡау гармонияһы (*бала – балаларҙы*), һуҙынҡы өндәрҙең һәм тартынҡы өндәрҙең гармонияһы (*ҡала – килә, ғауға – кисәгә*). Рус, ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә гармония мәсьәләһе.

Өн һәм хәреф. Улар бер-береһе менән тығыҙ бәйле булыуына ҡарамаҫтан, бер үк төшөнсә түгеллеген өнһөҙ хәрефтәр (ь, ъ ) йәки ике өндө белдереүсе хәрефтәр (я, ю, е, ё), айырым «хәрефһеҙ» өн (уы) асыҡ күрһәтә. Юғарыла һаналған хәреф һәм өндәрҙең бирелеше башҡорт телендә үҙенсәлекле. Мәҫәлән, рус теленән айырмалы буларак, **ь, ъ** хәрефтәре башҡорт телендә алдағы өндөң нәҙеклеген йәки ҡатылығын белдермәй. Улар түбәндәге осраҡтарҙа ҡулланыла:

– ҡушма һүҙҙәрҙә тәүгеһе тартынҡыға бөтөп, икенсеһе *я, ю* хәрефенә башланғанда*: ҡулъяулыҡ, көньяҡ, Аҡъюл;*

– ҡайһы бер ижектәрҙе өҙгән кеүек айырып әйткәндә: *маъмай, мәсьәлә*.

*Я, ю, е, ё* хәрефтәре ике өндө белдерә:

– һүҙ башында: *ялан, юл, ел*;

– һүҙ уртаһында һәм аҙағында һуҙынҡыларҙан һуң: *ҡуян, зыян, ҡая, баян, ҡыяр, зыялылар*;

– һүҙ уртаһында һәм аҙағында *ъ, ь* айырыу билдәләренән һуң: *төньяҡ, көньяҡ, аръяҡ, даръя, донъя, ашъяулыҡ*.

*Уы/үе, уа* [V]өнө яҙмала түбәндәгесә бирелә:

– һүҙ башында **в** хәрефе аша: *ваҡыт, Вәхит, ватан, Вәли, вәкил;*

– һүҙ уртаһында һәм аҙағында ҡалын тамырлы һүҙҙә **у**, нәҙек тамырлы һүҙҙә **ү** хәрефе аша: *а<u>у</u>ыл, та<u>у</u>, бә<u>ү</u>елә<u>ү</u>, көлә<u>ү</u>, киле<u>ү</u>.*

Башҡорт теленең орфографик ҡағиҙәләре. Хәрефтәрҙең дөрөҫ яҙылышы; һүҙҙәр һәм ялғауҙарҙың яҙылышы; һүҙҙәрҙе айырып, ҡушып, дефис (һыҙыҡса) һәм һыҙыҡ аша яҙыу; һүҙҙәрҙе баш хәреф менән яҙыу һәм юлдан юлға күсереү. Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу. Башҡорт әҙәби теле орфографияһының принциптары: фонетик принцип (башҡорт теленең төп принцибы) – һүҙҙәр нисек әйтелә, шулай яҙыла, мәҫәлән, *китап - китабы*; морфологик принцип – тамыр йәки ялғау нисек әйтелһә лә, һәр ваҡыт бер төрлө яҙыла, мәҫәлән, клуб – клубы; тарихи-традицион принцип – һүҙҙәр боронғо яҙылышы һәм яңғырашы буйынса яҙыла.

Башҡорт теленең орфоэпик нормалары (ҡыҫҡартып алынды):

– **б** өнө һуҙынҡы өндәр араһында **в** булып әйтелә: *түбә - [түвә];*

– тәүге һүҙ **п** өнөнә бөтөп, икенсеһе һуҙынҡы менән башланһа, **п в** булып әйтелә: *барып алдым – [барыв алдым];*

– **ҡ** һәм **к** өндәренә тамамланған һүҙҙәр эргәһендә һуҙынҡы өн менән башланған һүҙ килһә йәки **ҡ** һәм **к** өндәренә башланған һүҙҙәр алдынан һуҙынҡы өнгә бөткән һүҙҙәр килһә, шулай уҡ **ҡ** һәм **к** өндәре менән башланған һүҙҙәр алдынан **р, л, й, ҙ, з, ж, у, ү** өндәренә бөткән һүҙҙәр килһә, **ҡ, к** өндәре әйтелештә **ғ, г** өндәренә күсә: *ике көн – [ике гөн]*;

– **в** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә *уы /үе, уа* өндәрен белдерә: *вәкил – [үәкил], Ватан – [уатан];*

– **и** хәрефе һүҙ аҙағында *-ей, -ый* тип уҡыла: *ти – [тей], ни – [ней], Фәхри – Фәхрей* (иҫкәрмә: сифат яһаусы **и** үҙгәртелмәй уҡыла – милли, фәнни).

**Ижек.** Һүҙҙә нисә һуҙынҡы өн булһа, шул тиклем ижек була. Башҡорт телендә ижектәр бер, ике, өс, дүрт өндән торорға мөмкин. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең килеү тәртибенә ҡарап, башҡорт телендә ижектәр 6 төрлө килә (һ – һуҙынҡы, т – тартынҡы):

1. һ – <u>а</u>-тай, <u>ә</u>-сәй;
2. һт – ат, эт;
3. һтт – арт, әйт;
4. тһ – ба-ла, бә-лә;
5. тһт – таш, теш;
6. тһтт – ҡарт, дәрт.

Миҫалдарҙан күренеүенсә, башҡорт һүҙҙәрендә ижек башында ҡуш тартынҡылар килмәй. Ундай ижектәр рус теленән ингән һүҙҙәрҙә осрай: <u>ст</u>а-кан, Э<u>рнст</u>, <u>Шм</u>и<u>дт</u>.

Ижектәр асыҡ һәм ябыҡ төрҙәргә бүленә: әгәр ижек һуҙынҡыға бөтһә, асыҡ (һ, тһ), ә тартынҡыға бөтһә, ябыҡ (һт, һтт, тһт, тһтт) ижек була.

**Баҫым.** Һүҙҙәге ижектәрҙең береһенең көслөрәк тауыш менән әйтелеүе баҫым тип атала. Башҡорт телендә баҫым күбеһенсә һүҙҙең аҙаҡҡы ижегенә төшә: *ат'ай, олат'ай, өләс'әй.* Һүҙгә ялғау ҡушылған һайын, баҫым һуңғы ижеккә күсә бара: *эш – эшс'е – эшсел'әр, эшселәрҙәг'е – эшселәрҙәген'ән.* Башҡорт телендә баҫымдың һуңғы ижеккә төшмәгән осраҡтары ла бар:

1. һүҙ мәғәнәһен көсәйтеүсе ярҙамсы һүҙҙәр көслө баҫым менән әйтелә: *б'ик яҡшы, 'иң етеҙ;*

2. бойороҡ һөйкәлешендәге ҡылымдарҙа, әгәр улар көслө бойороу интонацияһы менән әйтелһә, баҫым беренсе ижеккә төшә: *'уйла, т'ыңла, һ'өйлә;*

3. хәбәрлек ялғауын ҡабул иткән һүҙҙәрҙә (*уҡытыус'ымын*), юҡлыҡ формалы ҡылымдарҙа (*ҡыҫҡ'ырма*), – *тай/-тәй, -дай/-дәй, -ҙай/-ҙәй, -лай/-ләй, -са/-сә* ялғаулы рәүештәрҙә (*бүр'еләй*, *һин'еңсә*), һорау киҫәксәһе булған һүҙҙәрҙә (*б'армы*) баҫым ошо ялғау алдындағы ижеккә төшә;

4. ҡайһы бер рәүештәрҙә (*ҡ'апыл*, *һ'аман*), һорау алмаштарында (*ҡ'айҙа*, *ҡ'асан*), теркәүестәрҙә (*б'әлки*, *л'әкин*) баҫым беренсе ижеккә төшә.

Һөйләмдәге төп фекерҙе белдерергә теләгән бер һүҙ көслө баҫым менән әйтелә. Ул **логик баҫым** тип атала. Башҡорт телендә логик баҫым һөйләмдә хәбәр алдындағы һүҙгә төшә һәм һорау шул һүҙгә бирелә: *Кисә мәктәпкә практикантт'ар килде.* (Кисә мәктәпкә к'емдәр килде?) *Кисә практиканттар мәктәпк'ә килде.* (Кисә практиканттар ҡ'айҙа килде?) *Практиканттар мәктәпкә кис'ә килде.* (Практиканттар мәктәпкә ҡ'асан килде?)

**Башҡорт теленең алфавиты.** Рәсәйҙә йәшәүсе төрки телле халыҡтарҙың күбеһе, шул иҫәптән башҡорттар, XV–XVI б. башлап XIX б. аҙағына тиклем ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән яҙыуҙы файҙаланған. Был осорҙа рәсми яҙма тел функцияһын иҫке төрки теле үтәгән. 1928 йылдан алып 1940 йылға тиклем башҡорттар латин яҙмаһы менән яҙа. 1940 йылдан башлап башҡорттар рус графикаһына нигеҙләнеп төҙөлгән алфавитты ҡуллана башлайҙар. Был алфавитта 42 хәреф бар. Алфавитты яттан белеү мөһим, сөнки һүҙлектәр, төрлө исемлектәр һ.б. алфавит тәртибендә төҙөлә.

### *Һүҙьяһалыш*

Башҡорт һүҙҙәре төҙөлөшө буйынса башҡа телдәрҙән, айырым алғанда, рус теле һүҙҙәренән шаҡтай айырыла. Рус һүҙҙәрендә булған приставка, суффикс кеүек бәрәмектәр башҡорт һүҙҙәрендә юҡ, ә уларҙың мәғәнәләрен башҡорт телендә ялғауҙар аша бирәбеҙ. Шунлыҡтан ялғауҙар һаны бихисап. Һүҙҙең төп мәғәнәһен аңлатҡан һәм бүленмәй торған өлөшө **тамырға** туранан-тура ялғанып, **ялғауҙар** һүҙ яһай йәки һүҙгә төрлө мәғәнә биҙәктәре биреп үҙгәртә. Ошо йәһәттән бөтә ялғауҙар яһаусы һәм үҙгәртеүсе төрҙәргә бүленеп өйрәнелә. **Яһаусы ялғау,** һүҙҙең тамырына йәки нигеҙенә ҡушылып, яңы мәғәнәле һүҙ яһай: *һунар – һунарсы – һунарсылыҡ*. Теге йәки был һүҙ төркөмөнөң үҙгәрешен күрһәткән ялғауҙар үҙгәртеүсе ялғауҙар тип атала. Үҙгәртеүсе ялғауҙарға күплек *(кеше-ләр)*, килеш *(кеше-нән)*, эйәлек заты *(кеше-м)*, хәбәрлек заты *(кеше-мен)* ялғауҙары, сифаттарҙың һәм рәүештәрҙең дәрәжә ялғауҙары *(ҡара-раҡ, яй-ыраҡ)*, ҡылымдарҙың йүнәлеш *(уҡы-ш, уҡы-т)*, күләм *(уҡы-ңҡыра)*, юҡлыҡ *(уҡы-ма),* һөйкәлеш *(уҡы-маҡсы, уҡы-һа)*, төркөмсә *(уҡы-рға, уҡы-у)*, заман *(уҡы-ған, уҡы-й, уҡы-ясаҡ),* зат-һан *(һал-ам, ҡайт-ам, ҡайт-абыҙ)* ялғауҙары инә.

Яһалышы буйынса һүҙҙәр тамыр, яһалма, ҡушма була. Тамыр һүҙ ‘тамырҙан’ *(аш)*, ‘тамыр + үҙгәртеүсе ялғауҙан’ *(аш + тан)* торһа, яһалма һүҙ ‘тамыр + яһаусы ялғау’ *(аш + а)*, ‘тамыр + яһаусы ялғау + үҙгәртеүсе ялғауҙан’ *(аш-а-ны)* тора. Ике йәки бер нисә тамырҙан яһалып, бер төшөнсә белдергән һүҙҙәр ҡушма һүҙ тип атала: *аҡҡош, тимер юл, бала-саға.*

Ҡушма һүҙҙәр бергә, айырым, һыҙыҡса аша яҙылырға мөмкин.

1. Тәүге һүҙе аныҡлаусы вазифаһын юғалтып, икеһе бергә бер атама булып китһә (*аҡһаҡал*); эйәлек заты өлгөһөндә яһалып та, аҙағында эйәлек ялғауы төшөп ҡалһа (*һабантуй*); кеше исемдәре, руссаға оҡшатып яһалған һүҙҙәр, туғанлыҡты белдергән ҡушма һүҙҙәр бергә яҙыла.

2. Ике йәки бер нисә һүҙҙән тороп, һуңғы һүҙендә эйәлек ялғауы булһа (*айыу еләге*); тәүге һүҙ аныҡлаусы мәғәнәһен һаҡлаһа (*ала ҡарға*); бәйләү юлы менән яһалһа (*спорт һарайы*) ҡушма һүҙ айырым яҙыла.

3. Һүҙҙәрҙе парлау йәки ҡабатлау юлы менән ҡапма-ҡаршы мәғәнәләге һүҙҙәрҙән яһалған (*малай-шалай, көн-төн*); ике атаманан яһалған географик исемдәр (*Ҡаңны-Төркәй ауылы*) һыҙыҡса аша яҙыла.

### *Морфология*

Морфология – һүҙ төркөмдәрен өйрәнеүсе бүлек. Һүҙ төркөмдәре үҙҙәре ике ҙур класҡа бүленә: үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.

Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре (исем, сифат, һан, алмаш, ҡылым, рәүеш) айырым торғанда ла мәғәнә белдерә. Ғәҙәттә улар түбәндәге талаптарға яуап бирә:

1) үҙенә генә хас мәғәнәһе була (исем – предметты белдерә; һан – иҫәпте белдерә);

2) үҙенә генә хас һорауы була (исем – кем? нимә?; һан – нисә? күпме?);

3) яһалышы буйынса айырыла, үҙенә генә хас яһаусы ялғауҙары була (исем – тамыр, яһалма, ҡушма, мәҫәлән, *таш – ташсы – таштуҫтаҡ*; һан – ябай һәм ҡушма);

4) үҙенә генә хас грамматик категорияларға эйә, үҙенә генә хас төркөмсәләре була (исем – һан, килеш, эйәлек заты, хәбәрлек заты менән үҙгәрә; һан төркөмсәләре – төп, рәт, бүлем, сама, йыйыу, кәсер, үлсәү һандары);

5) һөйләмдә үҙенә генә хас синтаксик вазифа үтәй (исем – ғәҙәттә, эйә, тултырыусы; һан – ғәҙәттә, аныҡлаусы).

Юғарыла ҡуйылған талаптарға алмаш һүҙ төркөмө тулыһынса тура килмәй, йәғни алмаштарҙың үҙенә генә хас мәғәнәһе, һорауҙары юҡ. Шулай ҙа уларҙы айырым үҙ аллы һүҙ төркөмө тип ҡарарға нигеҙ бар, сөнки, беренсенән, алмаштар телмәрҙе тасуирлау, ҡабатлауҙарҙан ҡотолоу өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булһа, икенсенән, алмаштар һан яғынан бик күп, үҙенсәлекле, шуға ла айырым төркөмсәләр барлыҡҡа килтерә.

**Исем.** Төрлө предмет, күренеш, төшөнсә атамаларын белдергән һүҙ төркөмө исем тип атала. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр була. Яңғыҙлыҡ исемдәргә кеше исемдәре, фамилиялар, ҡушаматтар, китап-журнал исемдәре, географик атамалар, урам һәм майҙан исемдәре, тарихи ваҡиғалар, дәүләт байрамдары, картина, кинофильмдар һ.б. исемдәр инә. Яңғыҙлыҡ исемдәр баш хәреф менән яҙыла. Китап, газета, журнал, картина, кинофильмдар, спектаклдәр, әҙәби һәм музыкаль әҫәрҙәр тырнаҡтар эсенә алып яҙыла: *«Оло Эйек буйында» романы, «Ағиҙел» журналы*. Ҡалған исемдәр уртаҡлыҡ исемдәргә ҡарай.

Һөйләмдә исемдәрҙең бүтән һүҙҙәргә төрлө ялғауҙар менән бәйләнеүе килеш менән үҙгәреш тип атала. Башҡорт телендә алты килеш айырып йөрөтөлә.

1. *Төп килеш: кем? нимә?* Был килештәге исемдәр эш-хәрәкәттең эйәһе кем йәки нимә булыуын аңлата, йәғни эш-хәрәкәтте башҡарыусыны белдерә. Төп килештәге исемдәр һөйләмдә эйә вазифаһын үтәй.

2. *Эйәлек килеш: кемдең? нимәнең?* Был килеш теге йәки был предметҡа икенсе бер предметтың йәки кешенең эйә булыуын аңлата, һөйләмдә аныҡлаусы вазифаһын үтәй.

3. *Төбәү килеш: кемгә? нимәгә?* Ул эш-хәрәкәттең берәй кешегә йәки предметҡа төбәлеүен, йә булмаһа берәй урынға йүнәлеүен аңлата. Төбәү килештәге исемдәр һөйләмдә тултырыусы ла, хәл дә булып киләләр.

4. *Төшөм килеш: кемде? нимәне?* Был килештәге исемдәр һөйләмдә ҡылым аңлатҡан эш-хәрәкәттең бер предметҡа төшөүен белдерә, ул тура тултырыусы ролен башҡара.

5. *Урын-ваҡыт килеш: кемдә? нимәлә?* Был килештәге исемдәр ҡылымдан аңлашылған эш-хәрәкәттең урынын, ваҡытын белдерә. Улар һөйләмдә ваҡыт хәле, урын хәле һәм хәбәр ролен белдерә.

6. *Сығанаҡ килеш: кемдән? нимәнән?* Был килештәге исемдәр эш-хәрәкәттең башланып киткән урынын йәки бөтөндән айырылған өлөштө, киҫәкте аңлата. Улар һөйләмдә тултырыусы, хәлдәр вазифаһын үтәй.

Был килештәрҙең икеүһе билдәле һәм билдәһеҙ формаларҙа килә ала:

1) *билдәле эйәлек килеш – ҡаланың баҡсаһы*
*билдәһеҙ эйәлек килеш – ҡалаø баҡсаһы*

2) *билдәле төшөм килеш – хатты яҙҙы*

*билдәһеҙ төшөм килеш – хатø яҙҙы*

Ҡайһы бер исемдәр, ҡылымға бәйләнеп, һөйләмдә тура тултырыусы булып килә, тик билдәле төшөм килештә генә тора һәм һәр ваҡыт ялғау менән ҡулланыла:

1) кеше исемдәре, фамилиялары һәм хайуандарҙың ҡушаматтары: *Әхәтте осраттым*;

2) туғанлыҡты белдергән исемдәр: *ағайҙы күрҙем*;

3) эйәлек заты ялғауҙарын ҡабул иткән исемдәр: *балаһын өйрәткән*;

4) исемдәр алдында алмаштар, ваҡытты, урынды белдергән һүҙҙәр торғанда*: өҫтәлдәге хатты алды*.

Исемдәрҙең эйәлек категорияһы предметтың ниндәй затҡа йәки ниндәй предметҡа ҡарағанлығын белдерә. Ул исемдәргә эйәлек заты ялғауҙары ҡушылыу юлы менән белдерелә:

| берлектә | күплектә |
|---|---|
| 1 зат ауыл-ым | 1 зат ауыл-ыбыҙ |
| 2 зат ауыл-ың | 2 зат ауыл-ығыҙ |
| 3 зат ауыл-ы | 3 зат ауыл-ы |

Эйәлек мәғәнәһен башҡа юлдар менән дә белдерергә мөмкин:

– исемдәр алдына *минең, һинең, уның, беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың* алмаштарын ҡуйыу аша – *минең китабым*;

– исемдәрҙең аҙағына *минеке, һинеке, унығы, беҙҙеке, һеҙҙеке, уларҙыҡы* алмаштарын ҡуйыу аша – *китап минеке*.

Эйәлек заты ялғауы ҡабул иткән исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе лә айырыла.

| Төп килеш | ил – илем | бала – балаң |
|---|---|---|
| Эйәлек килеш | ил-дең – илем-дең | бала-ның – балаң-дың |
| Төбәү килеш | ил-гә – илем-ә | бала-ға – балаң-а |
| Төшөм килеш | ил-де – илем-де | бала-ны – балаң-ды |
| Урын-ваҡыт килеш | ил-дә – илем-дә | бала-ла – балаң-да |
| Сығанаҡ килеш | ил-дән – илем-дән | бала-нан – балаң-дан |

Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы – һөйләмдә хәбәр функцияһын үтәүсе исемдең ҡылымдарҙың зат ялғауҙарын ҡабул итеүе. Ул хәбәрлек заты ялғауҙары аша бирелә.

| Берлектә | күплектә |
|---|---|
| 1 зат уҡыусымын | 1 зат уҡыусыбыҙ |
| 2 зат уҡыусыһың | 2 зат уҡыусыһығыҙ |
| 3 зат уҡыусы | 3 зат уҡыусылар |

**С и ф а т .** Предметтың билдәһен белдергән һүҙ сифат тип атала һәм ул ниндәй? ҡасанғы? ҡайҙағы? һорауҙарына яуап бирә. Сифаттар исем алдында килеп, уны асыҡлай һәм һан, эйәлек заты, килеш менән үҙгәрмәй. Сифат исем урынында ла килергә мөмкин. Был саҡта ул, исемдәр кеүек, һан, эйәлек заты, килеш менән үҙгәрә һәм һөйләмдә эйә лә, хәбәр ҙә, тултырыусы ла, анығлаусы ла булып килә ала. Сифаттарҙың ҡайһы берҙәре, исем урынында оҙаҡ ҡулланылғанға, үҙҙәренең сифат мәғәнәләрен юғалтып, бөтөнләйгә исемләшкәндәр. Мәҫәлән, *ҡарт, бай, оҫта.* (*Эскәмйәлә бер ҡарт ултыра).* Яһалышы яғынан сифаттар тамыр, яһалма һәм ҡушма булалар. Башҡорт телендә түбәндәге ялғауҙар сифат яһауҙа йыш осрай:

*-лы/-ле: аң – аңлы, белем – белемле;*

*-һыҙ/-һеҙ: баш – башһыҙ, тәм – тәмһеҙ;*

*-ҡы/-ке, -ғы/-ге: ҡыш – ҡышҡы, кис – киске, яҙ – яҙғы, йәй – йәйге;*

*-ҡыр/-кер, -ғыр/-гер: тап – тапҡыр, үт – үткер.*

Сифаттар ике ҙур төркөмгә айырылып өйрәнелә: төп һәм шартлы. Төп сифаттар предметтың билдәһен үҙ аллы белдерә: *һары, йәшел, ҙур, бәләкәй, матур* һ.б.

Шартлы сифаттар бер предметтың икенсе предметҡа ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәтен сағылдыра. Тимәк, улар билдәле шарттарҙа ғына сифат була, мәҫәлән, урын буйынса *(урмандағы сәскә, ҡалалағы баҡса),* ваҡыт буйынса *(иртәнге томан, көҙгө ямғыр),* предметтың нимәнән яһалыуы буйынса *(ағас өй, алтын сәғәт, йөн күлдәк).*

Предметтың төп сифат менән белдерелгән билдәһе төрлө дәрәжәлә булырға мөмкин. Төп дәрәжәләге сифат предметтың ғәҙәттәге билдәһен белдерә, уға ялғауҙар ҡушылмай: *аҡ сәскә.* Сағыштырыу дәрәжәһендәге сифат бер предметтағы билдәнең, башҡа предметтағы билдәгә ҡарағанда, сағыштырмаса артыҡ булыуын белдерә. Сағыштырыу дәрәжәһе *-раҡ/-рәк, -ыраҡ/-ерәк* ялғауҙары ҡушылып яһала: *ағыраҡ сәскә.* Артыҡлыҡ дәрәжәһендәге сифат бер предметтағы билдәнең башҡа шундай уҡ предметтағы билдәнән артыҡ икәнлеген белдерә: *ап-аҡ сәскә, иң аҡ сәскә.* Артыҡлыҡ дәрәжәһе түбәндәгесә яһала:

а) төп сифаттың беренсе ижегенә **-п** йәки **-м** өндәрен ҡушып, был ижекте ҡабатлау юлы менән: *ҡоп-ҡоро, йәм-йәшел;*

б) төп дәрәжәләге сифат алдына *бик, үтә, иң, сөм, ифрат, бигерәк, ғәжәп, уғата* көүек ярҙамлыҡ һүҙҙәр ҡуйыу юлы менән: *иң йәш, бик матур.*

Аҙһытыу дәрәжәһендәге сифаттар предметтағы билдәнең ғәҙәттәге билдәнән кәм булыуын белдерә: *аҡһыл сәскә.* Аҙһытыу дәрәжәһе төп дәрәжәләге сифаттарҙың беренсе ижеге аҙағына *-ғылт/-гелт, -ҡылт/-келт; -ғылтым/-гелтем,-ҡылтым/-келтем; -һыу/-һеү, -һыл/-һел; -ылтым/-елтем* ялғауҙарының береһе ҡушылып йәки төп дәрәжәләге сифаттар эргәһенә *ғына, генә, ҡына, кенә* киҫәксәләре ҡуйып яһала: *ҡыҙғылт алма, бәләкәй генә өҫтәл.*

Һөйләмдә сифаттар ғәҙәттә аныҡлаусы вазифаһын үтәй.

**Һан.** Предметтың иҫәбен, һаналыу тәртибен белдергән һүҙ һан тип атала. Һандар нисә? күпме? һорауҙарына яуап бирә. Һандар исем алдында килгәндә конкрет төшөнсәне белдерә һәм һөйләмдә аныҡлаусы булып килә. Төп, тәртип, йыйыу, үлсәү һандары исемләшеп китергә мөмкин, ул ваҡытта инде килеш, һан, эйәлек заты менән үҙгәрә.

Башҡорт телендә һандарҙың түбәндәге төркөмсәләрен айырып өйрәнәләр:

1. төп һандар *(өс, ун, егерме биш);*
2. рәт (тәртип) һандары *(өсөнсө, унынсы, егерме бишенсе);*
3. бүлем һандары *(өсәр, унар, егерме бишәр);*
4. сама һандары *(унлап, егерме бишләп);*
5. йыйыу һандары *(өсәү, унау);*
6. кәсер һандары *(икенән бер, бер бөтөн ундан биш);*
7. үлсәү һандары *(өслө лампа).*

Яһалышы яғынан һандар ике төркөмгә бүленә: ябай һандар (бер, илле) һәм ҡушма һандар (ун ике). Ҡушма һандар һүҙҙәрҙе бәйләү һәм парлау юлдары менән яһала, һәр һүҙе айырым яҙыла, ялғау һуңғы һанға ғына ҡушыла: *бер мең туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙынсы йыл.*

Һандар һүҙҙәр менән дә, цифрҙар менән дә (ғәрәп цифрҙары, рим цифрҙары) яҙылырға мөмкин. Рим цифрҙарынан һуң, датаны белдергән цифрҙарҙан һуң бер ниндәй ҙә ялғау яҙылмай: *XX быуат, 8 март*. Ғәрәп цифрҙарынан һуң ялғау һыҙыҡса аша яҙыла: 6-шар дәреслек. Предметтың һаналыу ваҡытын, күләмен, үлсәмен һәм сиктәрен күрһәткән цирфҙар араһында һыҙыҡ ҡуйыла: *1980-1990*

*йылдар.* Календарь йылды күрһәткән цифрҙар ҡыя һыҙыҡ аша яҙыла: *1999/ 2000 уҡыу йылы.*

**Алмаш.** Исем, сифат, һан һәм рәүеш һүҙ төркөмдәре урынында ҡулланыла алған һүҙҙәр алмаш тип атала. Алмаштар һөйләм эсендә генә ниндәйҙер мәғәнәгә эйә була. Уларҙың үҙҙәренә генә хас айырым һорауҙары ла юҡ. Алмаштар ниндәй һүҙ төркөмө урынында килһә, шул һүҙ төркөмөнөң синтаксик һәм морфологик формаларын ҡабул итә. Алмаштарҙың һөйләмдәге роле лә үҙҙәре алмаштырған һүҙгә бәйле. Алмаштырылған һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге булһа, алмаштар ҙа һөйләмдең шул киҫәге була.

Үҙҙәре аңлаткан мәғәнәләренә ҡарап, алмаштарҙы түбәндәге төркөмсәләргә бүләләр: зат алмаштары *(мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар)*; күрһәтеү алмаштары *(был, ошо, анау, быңдай, былай һ.б.)*; һорау алмаштары *(кем? нимә? ҡасан? ҡайҙа? һ.б.)*; билдәләү алмаштары *(һәр бер, һәр кем, үҙ, бөтә һ.б.)*; билдәһеҙлек алмаштары *(әллә кем, кемдер, теләһә кем һ.б.)*; юҡлыҡ алмаштары *(һис кем, бер нәмә лә һ.б.)*; эйәлек алмаштары *(минеке, һинеке, уныҡы, беҙҙеке, һеҙҙеке, уларҙыҡы)*.

Алмаштар күп түгел, ләкин улар йыш ҡулланыла. Һөйләмде йыйнаҡ һәм ҡыҫҡа итеүҙә уларҙың роле ҙур.

**Ҡылым.** Заттарҙың һәм предметтарҙың эшен, хәрәкәтен, хәлен һәм торошон белдергән һүҙҙәр ҡылым тип атала. Улар ни эшләй? ни эшләгән? һәм башҡа һорауҙарға яуап бирә. Яһалышы яғынан ҡылымдар тамыр (*ал, һал, бар, кит*), яһалма (*буша, күбәй, ҡана*), ҡушма (*баш тарт, тәҡдим ит, юл ҡуй*) формала була. Ҡылымдың башланғыс формаһын бойороҡ һөйкәлешенең берлектәге икенсе зат төрө үтәй (ни эшлә?): *уҡы, яҙ, һөйлә, уйла, мәжбүр бул.* Ҡылымдарҙың барлыҡ-юҡлыҡ формаһы эш-хәрәкәттең үтәлеүен йәки үтәлмәүен белдерә. Барлыҡ форманың формаль күрһәткесе юҡ, ә юҡлыҡ формаһы *-ма/-мә* киҫәксәләре менән яһала: *бар – барма, эшлә – эшләмә.* Бер генә һүҙҙән тороп, тулы мәғәнә аңлатып килеүсе ҡылым үҙ аллы була; үҙ аллы ҡылымға төрлө мәғәнә биҙәге өҫтәүсе ҡылымдар ярҙамсы ҡылым тип йөрөтөлә: *уйна – уйнай башла – уйнай һалып алдыҡ.* Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар бергә килгәндә, ярҙамсы ҡылым ғына зат менән үҙгәрә.

Башҡорт телендә бойороуҙы, хәбәрҙе, шартты, теләкте белдергән ҡылымдар зат менән үҙгәрә. Улар ҡылымдарҙың дүрт һөйкәлешен тәшкил итә. Хәбәр һөйкәлеше зат, һан һәм заман менән үҙгәрә. Эш-хәрәкәттең ваҡытҡа булған мөнәсәбәтенә ҡарап, хәҙерге заман (һөйләй), үткән заман (һөйләне, һөйләгән), киләсәк заман (һөйләр, һөйләйәсәк) ҡылымдарын айыралар. Үткән замандың шаһитлы (эшләне), шаһитһыҙ (эшләгән) формалары, киләсәк замандың билдәле (эшләйәсәк), билдәһеҙ (эшләр) формалары бар.

Бойороҡ һөйкәлешендәге ҡылым ниндәйҙер бер эште, хәрәкәтте башҡарырға йәки башҡармаҫҡа өндәүҙе, бойороуҙы белдерә һәм түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата:

– ғәҙәти бойороу: *бергәләп уҡығыҙ*;
– ҡаты бойороу: *килеп тә йөрөмә*;
– рәсми бойороу: *Ерҙә тыныслыҡ булһын*!;
– үтенес: *һөйлә әле*.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары зат, һан менән үҙгәрә, тик берлектәге 1 зат формаһы булмай.

Шарт һөйкәлеше эш-хәрәкәттең береһе икенсеһе үтәлеүенә шарт булып килеүҙе белдерә, зат, һан, заман менән үҙгәрә. Уның ябай формаһы тамыр ҡылымға *-һа/-һә* ялғауҙары ҡушылыу юлы менән яһала (*уҡы-һа, бел-һә*), ҡушма формаһы үҙ аллы ҡылымға *булһа* ярҙамсы ҡылымын өҫтәү юлы менән яһала (*уҡыр булһа, белгән булһа*).

Теләк һөйкәлеше эш-хәрәкәтте башҡарырға йәки башҡармаҫҡа саҡырыуҙы белдерә, зат, һан менән үҙгәрә. Уның ябай формаһы тамыр ҡылымға *-айым(-йым), -маҡсы* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһала (*барайым, һөйләмәксемен*), ҡушма формаһы үҙ аллы ҡылымға *килә, була, итә, бар, юҡ* ярҙамсы һүҙҙәр ҡушыу юлы менән яһала (*ҡайтҡы килә, әйтмәк була, эшләргә итә, бараһы бар*).

Ҡылымдар эшләгән эштең исемен, сифатын, ваҡытын, рәүешен, сәбәбен, эште эшләргә йәки эшләмәҫкә кәрәклеген белдереп килергә мөмкин. Улар ҡылым төркөмсәләре тип атала: исем ҡылым, сифат ҡылым, уртаҡ ҡылым, хәл ҡылым. Ҡылым төркөмсәләре зат менән үҙгәрмәй. Исем ҡылымдар нимә? ни эшләү? һорауына яуап бирә, исемдәр кеүек һан, килеш, эйәлек заты менән үҙгәрә. Улар һөйләмдә эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы булып килә. Сифат ҡылымдар ниндәй? нимә эшләгән? һорауҙарына яуап бирә, үткән заманда (*күргән кеше*), хәҙерге заманда (*һөйләүсе кеше*), киләсәк заманда (*һөйләйәсәк кеше*) килә. Сифат ҡылымдар хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарына оҡшаған, шулай ҙа уларҙы айырыусы билдәләр бар:

– сифат ҡылым һөйләмдең башында йәки уртаһында килә;

– сифат ҡылым исемдән килгән һүҙ алдында тора;

– сифат ҡылым ниндәй? һорауына яуап бирә, һөйләмдә аныҡлаусы булып тора.

Китапты *уҡыған* кеше (сифат ҡылым). Ул китапты *уҡыған* (хәбәр һөйкәлеше ҡылымы).

Уртаҡ ҡылым ни эшләргә? нимә эшләмәҫкә? һорауҙарына яуап бирә, зат, заман, һан менән үҙгәрмәй, һөйләмдә хәбәр, тултырыусы, хәл булып килә.

Хәл ҡылымдар ни эшләп? ни рәүешле? ни эшләгәс? ҡасан? кеүек һорауҙарға яуап бирә, зат, заман, һан менән үҙгәрмәй, һөйләмдә хәл булып килә. Яһалышына ҡарап, өс төргә бүленә:

I төрө – -п, -ып/-еп ялғауы менән яһала: *ҡабаланып яҙҙы*;

II төрө – -ҡас/-кәс, -ғас/-гәс ялғауы менән яһала: *уҡымағас, белмәй;*

III төрө – -ғанса/-гәнсә, -ғансы/-гәнсе, -ҡанса/-кәнсә, -ҡансы/-кәнсе ялғауҙары менән яһала: *һөйләгәнсе уйла; ул эшләгәнсе, ял ит.*

Ҡылым йүнәлеше эш-хәлдең йәки хәрәкәттең берәй кешегә йәки предметҡа йүнәлеүен белдерә. Башҡорт телендә ҡылымдың биш йүнәлеше бар: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше, уртаҡлыҡ йүнәлеше (*биҙә, биҙән, биҙәл, биҙәт, биҙәш).* Эш-хәрәкәттең күләмен, йәғни уның башланыуын, тамамланыуын, дауам ителеүен, ни тиклем оҙайлы йәки аҙ булыуын, ҡабатланыуын белдергән һүҙҙәр ҡылым күләмдәр тип атала: *һөйләңкерә, һөйләй һал, һөйләй башла.* Күләм төшөнсәләрен белдереү саралары:

1) ялғауҙар менән

– эш-хәрәкәттең көсәйә төшөүен белдереүсе ялғауҙар: *-ыраҡ/-ерәк, -ыңҡыра/-еңкерә – тыңлабыраҡ ултыр, уҡыңҡыра*;

– эш-хәрәкәттең ҡабатланыуын, кәмеүен белдереүсе ялғауҙар: *-ҡыла/-келә, -ыштыр/-ештер – барғыла, эшләштер*;

2) ярҙамсы ҡылымдар менән: *ял итеп ал, йырлап ебәр, һөйләп ташла, төшә яҙҙы, уҡып сыҡ һ.б.*

Ҡылым рәүешлеге берәй эште эшләргә мөмкинлек булыу-булмауҙы, эш-хәрәкәттең ысынға тура килмәүен, эш-хәрәкәткә кәмһетеп ҡарауҙы йә ышанып етмәүҙе белдерә: *Һин килә алаһың. Һеҙ әйткән булдығыҙ. Ул һөйләгән булды. Ул һөйләй була.*

**Рәүеш.** Рәүештәр эш йәки хәлдең билдәһен, уларҙың ниндәй хәлдәрҙә үтәлеүен белдерә, нисек? ҡасан? ҡайҙа? һорауҙарына яуап бирә. Рәүештәр яһалышы яғынан тамыр (*шәп, тиҙ*), яһалма (*уттай, аҡсалата*), ҡушма (*ары-*

*бире, элек- электән*) була. Рәүеш – үҙгәрмәүсе һүҙ төркөмө, тик ҡайһы бер рәүештәр сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәһендә килә ала. Аңлатҡан мәғәнәләренә ҡарап, рәүештәр 6 төркөмсә барлыҡҡа килтерә: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-маҡсат рәүештәре. Рәүеш менән сифат бер-береһенә оҡшаш, әммә айырырға мөмкин: рәүештәр эштең йәки хәлдең билдәһен аңлата, ҡылымды асыҡлай, нисек? ҡасан? һорауына яуап бирә һәм һөйләмдә хәл булып килә; сифаттар предметтың билдәһен белдерә, исемде асыҡлай, нindәй? һорауына яуап бирә һәм һөйләмдә аныҡлаусы булып килә: *яҡшы* китап (сифат) – *яҡшы* һөйләй (рәүеш).

**Ярҙамсы һүҙҙәр:** теркәүестәр, бәйләүестәр, киҫәксәләр, ымлыҡтар, мөнәсәбәт һүҙҙәр, оҡшатыу һүҙҙәре. Улар үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмалы була: үҙҙәре генә белдергән мәғәнәләре, һорауҙары юҡ, грамматик категориялар буйынса үҙгәрмәйҙәр, һөйләмдә, ғәҙәттә, айырым синтаксик вазифа үтәмәйҙәр. Улар түбәндәге разрядтар буйынса тикшереләләр.

Теркәүестәрҙең бүленеше: 1) теҙеү теркәүестәре: *йә, йәки, ләкин, һәм, тик, юҡҡа, әллә, шулай уҡ, йә иһә, әммә, ә, тағы, әле... әле, йәки, бәлки, ла - лә һ.б.* (улар йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү, аныҡлау теркәүестәренә бүленә);

2) эйәртеү теркәүестәре: *сөнки, тимәк, шуға күрә, хатта, шунлыҡтан, шуға ла, шуның өсөн, әгәр, гүйә, гәрсә һ.б.*

Бәйләүестәрҙең бүленеше:

1) төп һәм эйәлек килеште талап итеүсе бәйләүестәр: *менән, өсөн, кеүек, шикелле, төҫлө, һымаҡ, аша, тураһында;*

2) төп һәм төбәү килеште талап итеүсе бәйләүестәр: *тиклем, саҡлы, хәтле, ҡаршы, табан, ҡарамаҫтан;*

3) сығанаҡ килеште талап итеүсе бәйләүестәр: *башҡа, бүтән, бирле, элек, һуң, тыш.*

Киҫәксәләрҙең бүленеше:

1) көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре: *та, баһа, да баһа, иң, ап-, һап-, бит, -сы/-се;*

2) сикләү киҫәксәләре: *ғына/ генә, ҡына/ кенә, уҡ/ үк;*

3) тиҙлек киҫәксәләре: *да/ дә, ҙа/ ҙә, та/ тә;*

4) икеләнеү-билдәһеҙлек киҫәксәләре: *-дыр/-дер, -тыр/-тер һ.б.;*

5) һорау киҫәксәләре: *-мы/-ме, -мы ни, -ме ни һ.б.*

Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең бүленеше:

1. раҫлау һәм инҡар итеүҙе белдереү: *эйе, бар, юҡ, әлбиттә, һис һүҙһеҙ;*
2. тейешлек һәм кәрәклек модаль һүҙҙәре: *кәрәк, тейеш*;
3. мөмкинлек модаль һүҙҙәре: *мөмкин, ярай, мөмкин түгел, ярамай;*
4. самалау һәм икеләнеү модаль һүҙҙәре: *моғайын, бәлки, булһа кәрәк, күрәһең;*
5. иғтибарлылыҡ, өндәшеү модаль һүҙҙәре: *зинһар, ҡуйсәле, ғәфү итегеҙ, аңлайһығыҙмы.*

Ымлыҡтарҙың бүленеше:

1. көйөнөүҙе, үкенесте белдереүсе ымлыҡтар: *ай-ай, уф*;
2. ғәжәпләнеүҙе, шикләнеүҙе белдереүсе ымлыҡтар: *ай-бай, ай-һай, атаҡ, ах;*
3. һоҡланыуҙы, тынысһыҙланыуҙы, оялыуҙы белдереүсе ымлыҡтар: *аһ, аһа, их.*

Оҡшатыу һүҙҙәренең бүленеше:

1. өноҡшаш һүҙҙәр: *бип-бип, сылтыр-сылтыр, дөбөр-шатыр;*
2. һыноҡшаш һүҙҙәр: *ялт-йолт, йым-йым*;
3. саҡырыу һүҙҙәре: *һәү-һәү, бәр-бәр, бес-бес*.

***Синтаксис һәм пунктуация***

Синтаксис синтаксик берәмектәрҙең төҙөлөшөн һәм мәғәнәһен өйрәнә. Синтаксис, морфология кеүек үк, грамматиканың бер бүлеге булып һанала. Тыныш билдәләрен ҡулланыу ҡағиҙәләренең йыйылмаһы пунктуация тип атала.

**Синтаксистың төп берәмектәре – һүҙбәйләнеш һәм һөйләм.** Һөйләм һүҙҙәрҙән һәм һүҙбәйләнештәрҙән тора. Һүҙбәйләнеш – ул мәғәнәүи һәм грамматик яҡтан үҙ-ара бәйле ике йәки бер нисә һүҙ. Һүҙбәйләнештәр бер бөтөн уйҙы, фекерҙе аңлатмайҙар, уларҙың тамамланған интонацияһы ла булмай.

| һүҙбәйләнеш | һөйләм |
|---|---|
| – кәмендә ике һүҙҙән тора; | – бер һүҙҙән (Ҡыш.) йәки һүҙбәйләнештәрҙән тора; |
| – һүҙгә ҡарағанда киңерәк мәғәнәле була, тулыраҡ фекерҙе белдерә; | – тамамланған уй-фекерҙе белдерә; |
| – айырым интонацияһы булмай; | – тамамланыу интонацияһы була; |
| – бәләкәй хәреф менән яҙыла, тыныш билдәләре булмай | – ҙур хәреф менән башлана, кәмендә бер тыныш билдәһе була |

Һүҙбәйләнештәрҙә һүҙҙәр араһында теҙеү һәм эйәртеү бәйләнешен айырырға була. Эйәртеүле һүҙбәйләнештәрҙең дүрт төрө бар: башҡарылыу (*магазинға барам*), йәнәшәлек (*йәшел ағас*), һөйкәлеү (*ағайымдың китабы*), ярашыу (*һин уҡыйһың*).

Грамматик нигеҙенә (эйә һәм хәбәр) ҡарап, һөйләмдәр ябай һәм ҡушма була. Ябай һөйләм бер грамматик нигеҙҙән тора, ләкин уның береһе (эйәһе йәки хәбәре) булмаҫҡа ла мөмкин, ул ваҡытта һүҙ бер составлы һөйләмдәр тураһында бара.

Аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр, өҫтәлмәлек – һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Һөйләмдең йөкмәткеһен тулы, аныҡ һәм тасуири итеп сағылдырыуҙа эйәрсән киҫәктәрҙең әһәмиәте ҙур. *Йәй килде. Йәмле йәй килде. Ауылға йәмле йәй килде. Бына ауылға йәнә йәмле йәй килде.*

Аныҡлаусылар тиң булырға йәки тиң булмаҫҡа мөмкин: *аҡ, ҡыҙыл сәскәләр – матур аҡ сәскәләр.*

Тултырыусылар тура һәм ситләтелгән була: 1) *Шиғырҙы* (нимәне? билдәле төшөм килештә) *уҡыным*; *хат* (нимә? билдәһеҙ төшөм килештә) *яҙҙым*; 2) *таҡтаға* (нимәгә? төбәү килештә) *яҙған*; *Азаттан* (кемдән? сығанаҡ килештә) *һораны*.

Хәлдәр ҡылымдан килгән хәбәргә эйәреп, эш-хәрәкәттең эшләнеү ваҡытын, урынын, сәбәбен, маҡсатын, рәүешен, шартын һ.б. белдерә.

Өҫтәлмәлек – аныҡлаусының бер төрө. Аныҡлаусыларҙан айырмалы буларaҡ, өҫтәлмәлектәр предметтың билдәһен белдереп кенә ҡалмай, уның атамаһына әйләнә. Өҫтәлмәлектәр:

1) ғилми һәм хәрби дәрәжәләрҙе, кешеләрҙең һөнәрен белдерә – *профессор Н.К. Дмитриев*;

2) предметтың тәғәйенләнешен белдерә – *завод-лаборатория;*

3) туғанлыҡ-кәрҙәшлекте, енес айырмалығын сағылдырыусы һүҙҙәр, терминдар – *Рәшиҙә апай;*

4) топонимик исемдәргә эйәреп килеүсе номенклатур терминдар – *Өфө ҡалаһы*.

Һөйләмдең барлыҡ киҫәктәре лә тиң була ала: 1) бер үк хәбәргә ҡараған эйәләр, бер үк эйәгә ҡараған хәбәрҙәр, бер үк хәбәргә ҡараған тура һәм ситләтелгән тултырыусылар, хәлдәр һәр саҡ тиң була; 2) бер үк эйәгә, тултырыусыға, исемдән килгән хәлгә, хәбәргә ҡараған аныҡлаусылар тиң була. Тиң киҫәктәрҙең тиң булыуының төп шарты: тиң киҫәктәрҙең асыҡлап килгән

һүҙҙәре менән эйәртеүле бәйләнештә булыуы. Тиң киҫәктәрҙе үҙ-ара теркәүсе саралар: 1) йыйыу теркәүестәре – *һәм, да, дә*; 2) ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре – *ләкин, ә, тик, бәлки, әммә*; 3) бүлеү теркәүестәре – *йә, йәки, ни-ни, бер-бер, әллә, әле, берсә*; 4) *-мы, -ме* һорау киҫәксәһе ҡабул иткән һүҙҙәр.

Тик баш киҫәктәрҙән генә торған һөйләм йыйнаҡ, эйәрсән киҫәктәре лә булған һөйләм тарҡау тип атала.

Мәғәнә асыҡлығы өсөн бөтә кәрәкле киҫәктәре лә булған һөйләм тулы һөйләм була. Һүҙ барышында еңел аңлашылырлыҡ берәй киҫәге төшөрөлгән һөйләм кәм һөйләм тип атала. Кәм һөйләмдәрҙең мәғәнәһе алдағы һорау һөйләмдән (диалогтарҙа: –*Ҡасан ҡайтаһың? –Иртәгә.*), ситуациянан (автовокзалда: «*Килә!*» – һүҙ автобус тураһында барыуы аңлашыла), һөйләү темаһынан (монологта геройҙың йәки авторҙың уйҙары) еңел аңлашыла. Кәм һөйләмдәр, ҡыҫҡа һәм ыҡсым булып, ҡабатлауҙарҙан ҡотолдора, телмәрҙе йәнләндерә.

Кәм һөйләмдәрҙе бер составлы һөйләмдәр менән бутарға ярамай. Әйтергә теләгән фекерҙе бер составлы һөйләм менән дә аңлатырға мөмкин, мәҫәлән: *Ҡыш. Һыуыҡ.* Улар тулы һөйләм булып тора.

Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре:

1. Атама һөйләм: *Йәй. Көтөп алған йәмле йәй.*
2. Билдәле эйәле һөйләм (хәбәре берлектәге һәм күплектәге 1, 2 зат ҡылымынан): *Ауылға ҡайттыҡ.*
3. Билдәһеҙ эйәле һөйләм (хәбәре берлектәге һәм күплектәге 3 зат ҡылымынан): *Практикала һәйбәт эшләнеләр.*
4. Эйәһеҙ һөйләм (хәбәре теләк, уртаҡ ҡылымдарҙан): *Ауылға ҡайтҡы килә.*

Һөйләм киҫәктәренең һөйләм эсендә билдәле бер урыны, килеү тәртибе була.

1. Эйә һөйләмдең башында, ә хәбәр аҙағында килә: *Уҡыусылар дәрестән һуң ололарға ярҙам итергә барҙы.*
2. Аныҡлаусы аныҡланыусы һүҙҙең алдында килә: *Йәмле йәй тыуған ауылыма йәшел күлдәк кейҙергән.*
3. Тултырыусы менән хәлдәр, ғәҙәттә, эйә менән хәбәр араһында килә: *Гәзит-журналдар республикабыҙҙың төрлө ауылдарынан ҡыҙыҡлы хәбәрҙәр алып килә.*
4. Һөйләмдең дөйөм мәғәнәһенә генә бәйләнешле эйәрсән киҫәктәр һөйләмдең башында киләләр: *Кисә мәктәптә ҙур байрам үткәрелде.*
5. Логик баҫым төшкән һөйләм киҫәктәре хәбәр эргәһендә килә: *Яҡташ яҙыусылар менән осрашыу район үҙәгендә мәҙәниәт йортонда үтәсәк.*

Һөйләүсенең һүҙҙәрен үҙгәртмәйсә биреү тура телмәр тип атала. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә автор һүҙҙәре түбәндәгесә килергә мөмкин:

1. А.һ.: «Т.т!»
2. А.һ.: «Т.т.», - а.һ.
3. «Т.т.», - а.һ.
4. «Т.т., - а.һ. - Т.т.».

Һөйләүсенең һөйләгәненең төп йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрең менән әйтеп биреү ситләтелгән телмәр тип атала. Тура телмәр һәм ситләтелгән телмәр тығыҙ бәйләнештә була.

*«Мин ҡалаға барып, уҡырға инергә теләйем», – тине ҡыҙы әсәһенә.*

*Ҡыҙы әсәһенә ҡалаға барып, уҡырға инергә теләүе тураһында әйтте.*

**Диалог, диалогик телмәр** – ике кешенең һөйләшеүе. Әҙәплелекте (этикетты) сағылдырыусы диалогтарҙы (осрашыу, сәләмләү, хушлашыу, танышыу, ғәфү үтенеү, ғәфү итеү, рәхмәт әйтеү һ.б.), хәбәрләшеү, информация алмашыу, саҡырыу, үтенеү кеүек диалогтарҙы айырырға мөмкин.

**Монолог, монологик телмәр** – бер кешенең уй-кисерештәре тураһында һөйләүе. Мәктәп һәм тирә-йүндәге тормош темаларына, үҙ тормошондағы

ҡыҙыҡлы ваҡиға, мәктәптәге һәм өйҙәге дәрестәр тураһында, ял ваҡыты, уйындар, ҡыҙыҡһыныуҙарың, үҙеңдең тәьҫораттарың, ғаилә, уҡылған китап тураһында һөйләү монологик телмәр булып тора. Диалог һәм монологтар әҙәби әҫәрҙәрҙә, бигерәк тә драма әҫәрҙәрендә киң таралған.

Интонацияға, һөйләү маҡсатына һәм хис-тойғо биҙәгенә ҡарап, хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе айырып тикшерәләр. Яҙмала хәбәр һөйләм аҙағында нөктә, һорау һөйләм аҙағында һорау билдәһе, өндәү һөйләм аҙағында өндәү билдәһе ҡуйыла.

Ике йәки бер нисә ябай һөйләмдән төҙөлгән һөйләм ҡушма һөйләм тип атала. Ҡушма һөйләм эсенә ингән ябай һөйләмдәрҙе мәғәнә һәм интонация уртаҡлығы берләштерә. Ҡушма һөйләм эсенә ингән ябай һөйләмдәр үҙ-ара теҙеү йәки эйәртеү юлы менән бәйләнеп килеләр, ошонан сығып, ҡушма һөйләмдәр ике ҙур төркөмгә айырыла: теҙмә ҡушма һөйләмдәр һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.

Теҙмә ҡушма һөйләм эсендәге ябай һөйләмдәр үҙ-ара интонация йәки теркәүес ярҙамында бәйләнә. Ябай һөйләмдәр һанау интонацияһы менән бәйләнгән ҡушма һөйләмдәр бер үк ваҡытта булған һәм бер үк ваҡытта булмаған күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы белдерә.

1) *Малайҙар баҡсала ер ҡаҙыны, ҡыҙҙар унда түтәл яһаны.*

2) *Тәүҙә Әлфиә уҡып сыҡты, шунан хатты әхирәте алды, һуңынан улар бергәләп яуап яҙа башланы.*

Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә йыйыу (һәм, да, дә, ни-ни), ҡаршы ҡуйыу (ләкин, ә, әммә, мәгәр, тик), бүлеү (йәнә, йә, иһә, әле-әле) теркәүестәре ҡулланыла.

*Бөгөнгө байрамда егеттәр күмәкләп бейене, ә ҡыҙҙар матур йыр йырланы.*

Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә ябай һөйләмдәр араһында бер ваҡытта булған йәки бер-бер артлы булған ваҡиғалар сағылдырыла, сәбәп-һөҙөмтә, ҡапма-ҡаршылыҡҡа ҡоролған күренештәр тураһында хәбәр ителә. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр ике йәки унан күберәк ябай һөйләмдәрҙән тора.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр һәр ваҡыт ике ябай һөйләмдән тора. Уның береһе баш һөйләм була, ә икенсе эйәрсән һөйләм уға эйәреп, буйһоноп килә. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү ысулдары: теркәүестәр, бәйләүестәр, килеш ялғауҙары, интонация, мөнәсәбәт һүҙҙәр. Мәғәнәләре яғынан эйәрсән һөйләмдәр төп биш төргә бүленә, ә хәл һөйләмдәр, үҙ нәүбәтендә, һигеҙ төркөмсәгә айырыла.

Эйә һөйләм йә баш һөйләмдең эйәһе урынында килә, йә баш һөйләмдең мөнәсәбәт һүҙ менән бирелгән эйәһен асыҡлай, кем? нимә? һорауҙарына яуап бирә. *Эшемде яҡшы баһалаһалар, миңә шул еткән.*

Эйәрсән хәбәр һөйләм баш һөйләмдең хәбәре урынында килә, нимәлә? кемдеке? һорауҙарына яуап бирә. *Тауары ниндәй – хаҡы шундай.*

Аныҡлаусы һөйләм йә баш һөйләмдең аныҡлаусыһы урынында килә, йә баш һөйләмдең мөнәсәбәт һүҙ менән бирелгән аныҡлаусыһын асыҡлай, кемдең? ниндәй? ҡайһы? һорауҙарына яуап бирә. *Һиңә шундай теләгем бар: һин күберәк уҡырға тырыш.*

Тултырыусы һөйләм йә баш һөйләмдең тултырыусыһы урынында ҡулланыла, йә баш һөйләмдең мөнәсәбәт һүҙҙәр менән бирелгән тултырыусыһын асыҡлап килә; кемде? нимәне? кемгә? нимәгә? кемдә? нимәлә? кемдән? нимәнән? һорауҙарына яуап бирә. *Ул нимә әйтһә, шуны тыңла.*

Хәл һөйләмдәр, баш һөйләмдең хәбәренә эйәреп, эш-хәрәкәттең эшләнеү ваҡытын, урынын, сәбәбен, маҡсатын һәм башҡа шарттарын белдерә; ҡасан? ҡайҙа? нисек? ни өсөн? нимәгә ҡарамаҫтан? кеүек һорауҙарға яуап бирә. *Йәй еткәс, ялан-ҡырҙар гөрләп тора.*

Бер-береһенә эйәртеү юлы менән йәки теҙеү һәм эйәртеү юлы менән бәйләнгән ҡушма һөйләм эсендә өс, йә иһә унан да күберәк һөйләм булһа, ул ҡатмарлы синтаксик төҙөлмә тип атала. Башҡорт телендә ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙең өс төрөн айырып йөрөтәләр: күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр, теҙемдәр.

Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм бер баш һәм кәмендә ике эйәрсән һөйләмдән тора. Эйәрсән һөйләмдәр бөтәһе лә баш һөйләмгә эйәреп, бер үк һорауға яуап булып килһәләр, бындай эйәрсән һөйләмдәргә тиң эйәрсән һөйләм тиҙәр. *Көҙ еткәс, баҫыуҙа эштәр бөткәс, улар туй яһаны.*

Эйәрсән һөйләмдәр, бөтәһе лә баш һөйләмгә бәйләнеп тә, төрлө һорауға яуап булып килһәләр, бындай һөйләмдәргә тиң булмаған эйәрсән һөйләмдәр тиҙәр. *Ҡарҙар эреп, ҡара ер күренгәс, трактористар тәүлек әйләнәһенә эшләй башлай.*

Ябай һөйләмдәре үҙ-ара теҙеү һәм эйәртеү юлы менән бәйләнеп килгән төҙөлмә ҡатнаш ҡушма һөйләм була. *Был турала һөйләшеү булманы, ләкин бөтәбеҙ ҙә аңланыҡ: артабан былай йәшәү мөмкин түгел.*

[ 1 ], теҙмә бәйләнеш [ 2 ]: эйәртеүле бәйләнеш ( 3 )

Теҙемдәр ябай һөйләм формаһында ла, ҡушма һөйләм формаһында ла була. Ябай һөйләм формаһында килгәндә, теҙемдәрҙә тиң киҫәктәр йәки хәл әйтемдәре күп була, һөйләм бик тарҡау булып китә. Ҡушма һөйләмдәрҙән төҙөлгән теҙемдәрҙә теҙмә йәки күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр күп була. Теҙемдәр ҡобайырҙарҙа ҡулланыла, шиғырҙарҙа, һирәкләп сәсмә әҫәрҙәрҙә лә осрай.

*Уралып ятҡан Уралда,*
*Әле алай һөйләшеп,*
*Әле былай һөйләшеп,*
*Күгәрсендәй гөрләшеп,*
*Икәү – өсәү серләшеп,*
*Сыйырсыҡтай эркелешеп,*
*Ҡара ҡаҙҙай теҙелешеп,*
*Иртә ҡолон бәйләгән,*
*Күсә йөрөп йәйләгән*
*Һылыу-һылыу ҡыҙҙар бар* (Ҡобайырҙан).

**Пунктуация** – тыныш билдәләренең ҡуйылышын өйрәнә. Һөйләмдең мәғәнәһен һүҙҙәр, уларҙы үҙ-ара бәйләүсе саралар һәм интонация ярҙамында аңлайбыҙ. Яҙыуҙа интонация күп осраҡта тыныш билдәләре менән белдерелә, ләкин пауза яһалған һәр урында тыныш билдәһе ҡуйылмай. Һөйләм аҙағында нөктә, һорау билдәһе, өндәү билдәһе, күп нөктә ҡуйыла. Өтөр, ике нөктә, нөктәле өтөр, һыҙыҡ билдәләре һөйләм эсендә ҡуйыла. Инеш һөйләмдәр, авторҙың исеме йәйәләр эсенә алына. Тура телмәрҙең башында һәм аҙағында, цитаталарҙың башында, үҙ мәғәнәһендә килмәгән һүҙҙәрҙе айырғанда, китап, гәзит-журнал, һәр төрлө ойошма, предприятие исемдәрен айырғанда тырнаҡтар ҡуйыла. Ҡайһы бер осраҡтарҙа, тыныш билдәһенең ҡайҙа ҡуйылыуына ҡарап, һөйләмдең мәғәнәһе үҙгәрә.

*Туп-тура беҙҙең өйгә килеп төшмә тағы, берәй хәйлә табып, ауылға кил.*
*Туп-тура беҙҙең өйгә килеп төшмә, тағы берәй хәйлә табып, ауылға кил.*

## Әҙәбиәт
## Основная литература

1. Башҡорт теле: Программа һәм методик күрһәтмәләр: Башҡорт теленән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына (9-сы класс) һәм берҙәм төбәк имтиханына (11-

се класс) әҙерләнеүселәр өсөн / Төҙөүселәре: Л.М. Хөсәйенова, Г.Р. Абдуллина, Г.Д. Вәлиева. – Стәрлетамаҡ: БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы, 2013. – 80 бит.

2. Исҡужина Ф.С., Иҫәнғолова Г.А., Хөснөтдинова Р.Я. Башҡорт теленән берҙәм дәүләт имтиханы өсөн тестар варианттары. – Өфө: Педкнига, 2009. – 150-153-сө биттәр.

**Дополнительная литература:**

1. Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Г.Р.Абдуллина, Г.Д.Вәлиева, К.Ғ.Ишбаев (яуаплы мөхәррир) һ.б. – Өфө: Китап, 2012. – 616 б.
2. Вәлиева Г.Д. Башҡорт теле. Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләнеү буйынса уҡыу әсбабы. – Стәрлетамаҡ, 2008.
3. Дмитриев, Н.К. Грамматика башкирского языка / Н.К. Дмитриев; Отв. ред. Ф.Х. Хисаметдинова. – М.: Наука, 2008. – 264 с.
4. Кейекбаев Ж.Ғ. Ғилми хеҙмәттәр йыйынтығы һәм һайланма әҫәрҙәр. Т.1. Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Башҡорт теленең фонетикаһы. – Өфө: Китап, 2012. – 288 б.
5. Усманова М.Ғ. Башҡорт теле. Уҡырға инеүселәр өсөн ҡағиҙәләр һәм тестар. – Өфө, 2002.
6. Усманова М.Ғ., Абдуллина Ф.Р. Башҡорт теле. Уҡырға инеүселәр өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө, 2000.
7. Хәҙерге башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек / Ред. Ураҡсин З.Ғ., Ишбаев К.Ғ. – Өфө: Китап, 1986. – 400 б.

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНӘН ПРОГРАММА

### *Әҙәбиәт теорияһы*

Һүҙ сәнғәте булараҡ художестволы әҙәбиәт. Әҙәбиәттең ижтимағи һәм эстетик тәрбиә биреүҙәге әһәмиәте, тормош менән бәйлелеге, халыҡсанлығы.

Художество методы тураһында төшөнсә. Реализм. Романтизм.

Әҙәбиәттә типиклаштырыу алымдары. Художестволы образ. Прототип.

Әҙәби әҫәрҙең темаһы һәм идеяһы.

Әҙәби әҫәрҙең төҙөлөшө, сюжеты һәм композицияһы тураһында төшөнсә.

Әҙәбиәттең эпик, лирик, драматик төрҙәре. Жанр тураһында төшөнсә. Роман, роман-эпопея, повесть. Хикәйә, хикәйәт; поэма, шиғыр, баллада; драма, комедия, трагедия.

Шиғыр тураһында төшөнсә. Шиғырҙа ритм һәм рифма.

Һүрәтләү саралары (эпитет, сағыштырыу, метафора, метонимия, аллегория, гипербола, риторик өндәү, риторик һорау, антитеза, инверсия, ҡабатлау).

### *Халыҡ ижады*

Халыҡ ижады хаҡында төшөнсә. Уның яҙма әҙәбиәт үҫешендәге роле. Фольклорҙың әһәмиәте.

Халыҡ ижадының традицион жанрҙары.

Әкиәт, легенда, риүәйәт, көләмәстәрҙең жанр үҙенсәлектәре.

Йыр жанры. Уларҙы төркөмләү. Йырҙарҙа патриотик теманың сағылышы.

Афористик ижад төрҙәрендә халыҡ педагогикаһының сағылышы.

Ҡобайыр. Тыуған ил хаҡындағы ҡобайырҙар.

«Урал батыр» ҡобайырында үлемһеҙлек мәсьәләһенең ҡуйылышы.

«Аҡбуҙат» ҡобайырында социаль мотивтарҙың көсәйеүе. Әҫәрҙең «Урал батыр» менән бәйләнеше.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосы. Ырыуҙар берҙәмлеге идеяһының бирелеше.

«Алдар менән Зөһрә» эпосының композицион үҙенсәлектәре. Әҫәрҙең темаһы, идеяһы.

Сәсәндәр ижады. Сәсәндәрҙең башҡорт йәмғиәтендәге роле. XX быуат халыҡ сәсәндәре.

### *Башҡортостанда боронғо ҡулъяҙма әҙәбиәт*

Шәжәрәләр. Уларҙың художестволы әҙәбиәткә мөнәсәбәте.

Тәүарихтар. Уларҙа Башҡортостан тарихының сағылышы.

Публицистика. Азатлыҡ көрәшенең ҡулъяҙмаларҙа сағылышы. «Батыршаның батшаға яҙған хаты», яҙма ҡомартҡы булараҡ уның әһәмиәте.

С.Юлаев ижады. «Тыуған илем», «Уралым», «Уҡ», «Егеткә» һ.б. шиғырҙары.

Салауат тураһында Р.Игнатьев, Ф.Нефедов, С.Злобин. Башҡорт фольклорында һәм әҙәбиәтендә С.Юлаев образы.

### *XIX быуат әҙәбиәте*

XIX быуаттың беренсе һәм икенсе яртыһында Башҡортостанда әҙәбиәт үҫеше. Мәғрифәтселек хәрәкәте.

М.Аҡмулланың тормош һәм ижад юлы. Шағирҙың автобиографик әҫәрҙәре. Халыҡты мәғрифәткә өндәү, феодаль иҫкелеккә, дини фанатизмға ҡаршы көрәш. Ижадында социаль мотивтар, ғәҙеллек идеяһы. Аҡмулла ижадында сатира. Ҡобайыр стилендәге шиғырҙары («Бәхет», «Аттың ниһен маҡтайһың», «Нәсихәт»). Әхлаҡи проблемаларҙың ҡуйылышы («Бәдбәхеткә һүҙем үтмәҫ», «Ҡәнәғәт», «Донъя»).

М.Өмөтбаевтың тормошо һәм ижады. М.Өмөтбаев – мәғрифәтсе. Уның тарих, этнография, фольклор, тәржемә, әҙәбиәт өлкәләрендәге эшмәкәрлеге. Шиғырҙарында төп темалар. «Йомран иле», «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы», «Ҡайыш илә йүкә» әҫәрҙәре.

Ризаитдин Фәхретдиндең тормошо һәм ижады. Р.Фәхретдин – мәғрифәтсе. Уның педагогика өлкәһенә ҡараған хеҙмәттәрендәге төп проблемалар. «Аҫар» китабы. Р.Фәхретдиндең тарих фәненә индергән өлөшө. «Сәлимә», «Әсмә» повестарында мәғрифәтселек ҡараштарының сағылышы.

### *XX быуат әҙәбиәте*

Мәғрифәтселек реализмынан тәнҡитле реализмға күсеү. Әҙәбиәттә романтизм күренештәре.

Сафуан Яҡшығолов ижады. «Башҡорт ағаларыма хитап», «Дим буйы» шиғырҙарында халыҡ яҙмышы хаҡында уйланыуҙар.

Фәтхелҡадир Сөләймәнов – күренекле тюрколог, ғалим. Уның тормошо һәм ижады. Башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашыуы, сит илдә йәшәүе.

«Тимербай ҡурайсы» хикәйәһендә төп геройҙың аяныслы яҙмышын күрһәтеү. «Башҡорт йәйләүендә» һ.б. хикәйәләрендә халыҡ яҙмышы хаҡында уйланыуҙарҙың дауам ителеүе. «Салауат батыр» пьесаһында азатлыҡ идеяһын ҡуйыу.

Д.Юлтыйҙың тормошо һәм ижады. Империалистик һуғышҡа арналған шиғырҙарында ҡан ҡойошҡа протест белдереү. Революцион рухтағы әҫәр булараҡ «Ҡан баҙары», унда һалдатты ут эсенә ебәреүселәргә нәфрәт белдереү.

Д.Юлтый – прозаик. «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе. Төп геройҙа тормоштоң аяуһыҙ шарттарына протест тойғолары уяныуы. Әҫәрҙең социаль-философик проблемалары.

«Ҡан» романының яҙылыу тарихы, сюжеты, композицион үҙенсәлектәре. Һалдаттар образдары, уларҙың рухи эволюцияһы. Романдың идея-проблематикаһы.

«Ҡарағол» драмаһы, уның конфликты, тарихи ерлеге. Иван Иванович, поп Андрей кеүек колонизаторҙар, уларға ҡуштанланыусы Ишмырҙа кантон, Әпкәләйҙәрҙе һүрәтләү. Уларға ҡаршы ойошторолған халыҡ хәрәкәте. Башҡа халыҡ вәкилдәре менән дуҫлыҡ, берҙәмлек идеялары.

М.Ғафуриҙың тормошо һәм ижады. Башланғыс ижадында мәғрифәтселек идеялары («Себер тимер юлы», «Фәҡирлек менән үткән тереклек» һ.б. әҫәрҙәре). Әҫәрҙәрендә социаль тигеҙһеҙлек мотивтары («Баҙарға сыҡтым», «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» һ.б.).

Революция осоро һәм егерменсе йылдарҙағы поэзияһы. Иҫкене емереү, яңынан төҙөү мотивтары. «Ант» шиғыры. Яңы кешенең әхлаҡи һыҙаттарын асыу («Бир ҡулыңды», «Гөлдәр баҡсаһында»).

«Ҡара йөҙҙәр» повесында дин мәсьәләләренә идеологик күҙлектән ҡарау. Әҫәрҙә рухи кисерештәрҙең эҙмә-эҙлекле бирелеше, уның әһәмиәте.

Ғ.Хәйриҙең тормошо һәм ижады. «Боролош» романының баҫылып сығыу тарихы, уның оҙаҡ донъя күрә алмауының сәбәптәре. Әҫәрҙә ярлы халыҡтың ауыр тормошон, йәшәп килгән тәртиптәр менән ризаһыҙлығын күрһәтеү. Шәмси, Вәхит, Ғәли образдарында йәш быуындың яңы заман, яңы мөнәсәбәттәр өсөн көрәшен күрһәтеү. Ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге урынына бәйле мәсьәләләр. Романдың әһәмиәте.

«Өсәүҙең тарихы» («Мәхфүзә») повесында иҫкелек ҡалдыҡтары, яңы әхлаҡ өсөн көрәште сағылдырыу. Мәхфүзә, Ҡотош, Сәғитйән образдарында яңы кешенең төрлө ҡаршылыҡтар аша формалашыуын күрһәтеү.

Ғ.Сәләм ижады. «Шоңҡар» поэмаһында яңы кеше формалашыуын күрһәтеү. Әхмәт, Миңъян образдарының асылы. Әҫәрҙең композицион үҙенсәлектәре.

«Бала» поэмаһында мещанлыҡты тәнҡит итеү. Әршитлекте фашлау. Мөхәббәт, ғаилә мәсьәләләренең хәл ителеше.

С.Мифтахов ижады. Пьесаларында заман темаһын үҙәккә ҡуйыу. «Ялан ҡыҙы», «Һаҡмар», «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» әҫәрҙәрендә яңы кешенең рухи һыҙаттарын билдәләү. Пьесаларҙа конфликт үҙенсәлектәре.

Р.Ниғмәти ижады. «Йәмле Ағиҙел» буйҙары» поэмаһының халыҡсан стиле: әкиәт, ҡобайыр, йыр жанрҙарына мөрәжәғәт итеү. Халыҡ яҙмышының символы булараҡ Ағиҙел образы.

«Үлтер улым, фашисты!» әҫәрендә яуға күтәрелгән халыҡтың рухи берҙәмлеген, батырлығын данлау. Ҡобайыр мотивтары. Символик образ булараҡ Уралтау. Поэмала Башҡорт атлы дивизияһының ойошторолоуын һәм яу юлын һүрәтләү, Урал улдары образдары.

«Һинең кәләшеңдең хаттары», «Егеттең яуаптары» поэмаларында мөхәббәт һәм ил алдындағы бурыс темаларын асыу.

«Һаҡмар ҡыҙы» поэмаһының төп геройҙары. Яңы кешенең характер һыҙаттарын биреү.

«Хәйерле юл һеҙгә!» әҫәрендә Тыуған ил, файҙалы хеҙмәт, уҡыу темаһы.

Р.Ниғмәти ижадына заман йоғонтоһо. Халыҡ шағирының башҡорт поэзияһында тотҡан урыны.

Б.Бикбай ижады. «Ер» поэмаһының яҙылыу ваҡыты, әҫәрҙең эпиграфы. Әҫәрҙә азатлыҡ өсөн көрәш һәм ер яҙмышы темаһы. Героик тарихты бөгөнгөгә бәйләү.

Б.Бикбайҙың «Туған тел», «Пограничник һәм уның әсәһе» һ.б. шиғырҙарының темалары, поэтик эшләнеше.

Б.Бикбай – драматург. «Ҡарлуғас» драмаһының тарихи ерлеге. Ҡарлуғас, Шатморат, Ҡормой, Көнһылыу образдарында халыҡ яҙмышын һүрәтләү.

«Салауат» драмаһында милли һәм социаль азатлыҡ өсөн көрәш. Салауат һәм Юлай образдарының романтик һәм реалистик һыҙаттары.

«Ҡаһым түрә» драмаһында легендар шәхес образы. Әҫәрҙең социаль-әхлаҡи проблемалары. Ҡаһым, Байыҡ, Аҡъегет, Аҫылбикә кеүек образдар аша халыҡ патриотизмын күрһәтеү.

Б.Бикбай – драматург. «Аҡсәскә» повесында һүрәтләнгән осор, уға хас әхлаҡи мәсьәләләр.

И.Насыриҙың тормошо һәм ижады. «Еңелгән ятыу» повесында шәхес һәм коллектив араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙең сағылышы. Шәхси милекселек, индивидуалистик ҡараштарҙы кәүҙәләндереүсе Шәрәфи образы. Яҙыусының эске ҡаршылыҡтарҙы һүрәтләүҙәге оҫталығы. Символик мәғәнәгә эйә Ҡара ятыу образы. Социализм идеяларының тантана итеүен раҫлау, уның бәхәслелеге.

Һ.Дәүләтшинаның тормошо һәм ижады. «Айбикә» повесында ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлылыҡ өсөн көрәшеүен күрһәтеү. Төп образдарға характеристика. Әҫәрҙең халыҡсанлығы.

«Ырғыҙ» романының яҙылыу тарихы. Романда башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш юлына баҫыуын күрһәтеүсе Айбулат, Гөлйөҙөм образдары. Социаль тип булараҡ Ниязғол бай, уның ғаиләһе. Әҫәрҙә милли характерҙар бирелеше. Халыҡтың тормош-көнкүрешен, йолаларын сағылдырыу. Романдың сюжет-композицион үҙенсәлектәре. «Ырғыҙ» – Һ.Дәүләтшинаның тормош һәм ижад ҡаһарманлығы.

М.Кәримдең тормошо һәм ижады. Шағирҙың хәрби темаға яҙылған шиғырҙары («Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!», «Башҡорт халҡына яуап хат», «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа» һ.б.).

«Үлмәҫбай» поэмаһында әкиәт алымдары менән эш итеү.

«Ҡара һыуҙар» поэмаһында һуғыш һәм тыныслыҡ темаһы. Мөхәббәт, тоғролоҡ, хыянат, ил алдында яуаплылыҡ тойғоларына бәйле проблемалар күтәреү. Поэтик деталдәр, контраст алымдары менән эш итеү. Сюжет һыҙығы.

«Европа – Азия» шиғырҙар циклы, унда күтәрелгән төп идея-проблемалар. Циклдың «һалҡын һуғыш» шарттарында, донъяның социалистик һәм капиталистик лагерҙарға бүленгән дәүерҙә яҙылыуы һәм осорҙоң идеологик йоғонтоһон кисереүе. Тыуған ил, ватансылыҡ тойғоларының бирелеше.

М.Кәримдең философик лирикаһы («Кеше», «Быуат», «Ҡурҡам» һ.б. шиғырҙары).

«Айгөл иле» драмаһында төп образдың романтик һыҙаттары. Әҫәрҙә граждандлыҡ тойғоларының бирелеше. Йәғәфәр – Ябағаев линияһы. Сит кеше образы һәм сит кешеләр. Ике йөҙлөлөктө фашлау, намыҫ һәм выжданға эйә көслө рухлы шәхесте данлау.

«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесының жанр үҙенсәлектәре. Әҫәрҙә күтәрелгән философик һәм әхлаҡи проблемалар: шәхестең формалашыуына йоғонто яһаусы шарттар, шәхес һәм йәмғиәт араһындағы мөнәсәбәттәр, мөхәббәт, ғаилә, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре. Повеста һүрәтләнгән образдарҙың үҙенсәлектәре, милли һыҙаттары. Әҫәрҙең башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны.

«Ярлыҡау» повесында енәйәт һәм яза проблемаһы. Йәнтимер Байназаров, Любомир Зух, Мария Тереза образдары. Повестың сюжет үҙенсәлектәре.

М.Кәримдең балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәре. «Өс таған» повесында балалар характерын биреү үҙенсәлектәре.

«Ай тотолған төндә» трагедияһында рухи азатлыҡ идеяларының сағылышы. Трагик һәм героик образ булараҡ Аҡъегет, Зөбәржәт, Тәңкәбикә. Диуана һәм Дәрүиш образдарының әҫәрҙәге роле.

«Ташлама утты, Прометей!» трагедияһында боронғо миф мотивтарын яңыса үҫтереү. Прометей образы. Ут символы, уның яңылыҡ, прогресс төшөнсәһе менән уртаҡлығы.

Н.Нәжмиҙең тормошо һәм ижады. Тыуған ил, Ватан темаларына мөрәжәғәт итеү, патриотик лирикаһының үҙенсәлектәре.

«Йыр тураһында баллада» поэмаһында реаллек һәм шартлылыҡ, символика. Шағир һәм яугир образы, уның прототибы. Батырлыҡҡа дан йырлау.

«Ҡапҡалар» поэмаһында тотош быуындың тормош баҫҡыстарын күрһәтеү. Поэманың фәлсәфәүи нигеҙе. Ижад мәсьәләләренә, шағир яҙмышына бәйле һорауҙар күтәреүе, «күңел ҡапҡаларын ҡағыу»ҙың мәғәнәһе.

«Урал» поэмаһында ҡурайсы образы. Ил алдында бурыс, шәхес яҙмышы хаҡында уйланыуҙар.

Н.Нәжми ижадының әһәмиәте.

З.Биишеваның тормошо һәм ижады. «Йәшәү – бәхет», «Йырлайым», «Йырҙарым» шиғырҙарында тыуған илгә тоғро хеҙмәт, ижад мәсьәләләрен күтәреү. Лирик геройҙың граждандлыҡ тойғолары.

«Мөхәббәт һәм нәфрәт», «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәттәрендә халыҡ ижады мотивтары, әҫәрҙәрҙең легенда һәм әкиәт формаларына ҡоролоуы.

«Сәйер кеше» повесының идея-проблемалары. Төп образдарға характеристика. Композицион үҙенсәлек булараҡ герой исеменән һөйләү, уның әһәмиәте.

«Тылсымлы ҡурай» әҫәрендә фольклор традициялары, әҫәрҙә әкиәт алымдарына мөрәжәғәт итеү (атаның васыяты, өсәү араһынан тик кинйә улдың уны үтәргә тырышыуы, шартлы күренештәр һ.б.). Ер-әсә, ҡурай образдары, уларҙың символик мәғәнәләре.

«Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында», «Емеш» романдарының тарихи ерлеге, азатлыҡ өсөн көрәште һүрәтләү. Байгилде, Тимербай, Хаммат, Иштуған образдары. Трилогияла ҡатын-ҡыҙ образдар. Милли характер үҙенсәлектәре, этнографик биҙәктәр. Яңы кеше формалашыуын күрһәтеү.

Халыҡ яҙыусыһы З.Биишева ижадының әһәмиәте.

Р.Ғариповтың тормошо һәм ижады. «Тормош», «Ғүмер», «Бәхет», «Киләсәк», «Аманат» һ.б. шиғырҙарының фәлсәфәүи йөкмәткеһе. «Урал йөрәге» әҫәрендә Башҡортостан образы. «Уйҙарым» ҡобайырында халыҡ яҙмышы хаҡында борсоулы фекерҙәр.

«Батырша» балладаһында тарихи шәхестең рухи донъяһына мөрәжәғәт итеү. Башҡорт батырының зиндандағы һуңғы көндәре. Поэтик деталдәр.

«Табыныу» поэмаһының яҙылыу тарихы. Революция һәм халыҡ яҙмышы мәсьәләләре. Поэма – Р.Ғариповтың граждандлыҡ батырлығы.

Р.Ғарипов – тәржемәсе. Р.Ғарипов көндәлектәре.

Р.Ғарипов поэзияһының художестволы үҙенсәлектәре. Уның башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны.

Ә.Хәкимовтың тормошо һәм ижады. Хәрби темаға яҙылған повестарында шәхесте экстремаль шарттарҙа күрһәтеү. «Аҡһаҡ бүре», «Алтынсәс», «Бәйге» повестарының художестволы эшләнеше.

«Һауыр ҡумта» романында халыҡ яҙмышын һүрәтләү. Ҡыуандыҡ образы. «Далаға мәғрифәт усаҡтары ҡабыҙырға» ҡайтҡан егеттең фажиғәле яҙмышы. Сәйфелмөлөк образының үҙенсәлектәре.

«Думбыра сыңы» романының тарихи ерлеге, үҙ аллы дәүләт өсөн көрәш. Һабрау образы. Уның берҙәмлек идеяларын яҡлап сығыш яһауы.

«Өйөрмә» романында шәхес һәм халыҡ яҙмыштарын һүрәтләү. Тоталитар режимдың интеллигенция яҙмышына йоғонтоһо. Богдановтар ғаиләһе, Искәндәр образы. Символик образ булараҡ өйөрмә.

«Ҡуштирәк» романының стиль үҙенсәлектәре, ваҡиғаларҙың юмористик планда бирелеше. Таңһылыу образы. Ҡуштирәктең төрлө холоҡло кешеләрен һүрәтләү.

А.Абдуллин ижады, уның башҡорт драматургияһына индергән өлөшө. «Ун өсөнсө председатель» һәм «Һуңғы уҙаман» дилогияһы. Сәғәҙиев образы, уның шәхестең иркен сикләүсе социаль-иҡтисади шарттарға ҡаршы көрәше. «Ун өсөнсө председатель» әҫәренең форма үҙенсәлеге. Суд барышында әйтелгән ҡаршылыҡлы фекерҙәрҙе барлау, сағыштырыу мөмкинлеге. Пьесала торғонлоҡ осорона хас ауыл проблемаларын ҡуйыу, крәҫтиән яҙмышын күҙаллау. Пьесаның новаторҙарса яңғырашы.

Р.Бикбаев ижады, шиғырҙарында граждандлыҡ пафосы. «Башҡортостан бында башлана», «Ете быуыным», «Салауат ҡылысы», «Ваҡыт менән һөйләшеү» һ.б. шиғырҙарында халыҡ тарихы, киләсәк, быуындар бәйләнеше хаҡындағы уйҙары.

«Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында социаль, экологик, мораль-этик мәсьәләләрҙең үткер ҡуйылышы. Әҫәрҙең сюжет-композицияһы, лирик геройҙың Ағиҙел буйлап сәйәхәт итеүе, Бөрйән урмандары, Шүлгән, Иштуған һыуһаҡлағысы, Башҡорт АЭС-ы, Шаһтау яҙмышы хаҡындағы борсоулы уйҙары.

Тел, милләт яҙмышына бәйле күтәргән мәсьәләләр, «Халҡыма хат» поэмаһы, уның яҙылыу тарихы.

Р.Бикбаев ижадының әһәмиәте.

Б.Рафиҡов ижады. Тарихи прозала яңы үҫеш тенденцияларын билдәләүсе «Эйәрләнгән ат» әҫәре, уның жанр үҙенсәлеге. Әҫәрҙә С.Юлаев, Ю.Аҙналин, Етембай, Роман-Һеләүһен образдары.

«Ҡараһаҡал» романының тарихи ерлеге, халыҡтың милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшен һүрәтләү. Төп геройҙың бала сағы, характерын формалаштырыусы шарттар; Бәпәнәй абыз образы.

Н.Мусин ижады. «Шайтан ҡуласаһы», «Кеше һуҡмағы» повестарында замандаштың күңел донъяһын күрһәтеү. Әхлаҡ мәсьәләләре, бер-береңә, тирә-йүнгә һаҡсыл мөнәсәбәтте раҫлау идеялары.

«Мәңгелек урман» романының идея-проблематикаһы. XX быуат башында Башҡортостанда социаль, милли-колониаль иҙеүҙе күрһәтеү. Башҡорт урмандары яҙмышын халыҡ яҙмышы менән бәйләү. Төлкөсура образы. Лапшиндар, Мирзаев, Уйылдан менән мөнәсәбәттәр аша заманға хас социаль конфликт үҙенсәлектәрен асыу.

Н.Мусин ижадының әһәмиәте.

Я.Хамматов ижады. «Төньяҡ амурҙары» әҫәрендә XIX быуат башында башҡорт халҡының тормош-көнкүреш шарттарын һүрәтләү. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттарҙың ҡатнашыуы. Халыҡтың яугирлыҡ традициялары, батырлыҡ өлгөләре күрһәтеүе.

Яҙыусының емешле ижады.

Р.Солтангәрәев ижады, хикәйә оҫтаһы булараҡ танылыуы. «Ғүмер», «Шкаф», «Тыуған яҡ», «Йырсы», «Хамбал» хикәйәләрендә кешенең рухи донъяһын, күңел байлығын, эскерһеҙлеген асыу менән бер рәттән яуызлыҡ, тупаҫлыҡ кеүек һыҙаттарҙың тамырҙарын юллау.

«Осто бөркөт» повесында граждандар һуғышы геройы Муса Мортазиндың яҙмышын сағылдырыу. Осорға хас ҡатмарлы, фажиғәле хәл-ваҡиғаларҙың реалистик ерлеге.

Д.Бүләков ижады. «Ғүмер бер генә» романында заман проблемаларының сағылышы. Арынбаҫаров һәм Ҡаҙнабаев араһындағы конфликтлы

мөнәсәбәттәрҙең реалистик ерлеге. Намыҫһыҙлыҡҡа, әҙәпһеҙлеккә кешенең күңел сафлығы, выждан кеүек һыҙаттарҙы ҡаршы ҡуйыу. Әҫәрҙә экологик теманың яҡтыртылыуы.

«Килмешәк» романында ауылда үҙгәртеп ҡороуҙар осорон һүрәтләү. Нуриханов һ.б. образдар аша команда-административ эш методтарын тәнҡитләү. Эшкә ижади мөнәсәбәтте сағылдырыусы Яубаҫаров образы.

Ғ.Хөсәйенов – ғалим һәм әҙип. Философик уйланыуҙарға, күҙәтеүҙәргә ҡоролған «Тормош» парсалар йыйынтығы. Парса жанрының үҙенсәлеге.

«Батырҙар ҡиссаһы» китабына ингән «Алдар батыр ҡиссаһы», «Пугачев фельдмаршалы», «Рудасы Исмәғил Тасим улы» повестары, уларҙа тарихи шәхестәр, халыҡ яҙмышының сағылышы. Халыҡ тарихының героик биттәре.

«Ҡанлы илле биш» романында тарихты документаль ерлектә һүрәтләү. Батырша образы, уның ҡаршылыҡлы яҡтары. Әмин, Сураш, Алҡыш, Һөйөндөк образдары аша халыҡтың азатлыҡ көрәшенең быуындан-быуынға тапшырыла килеүен һүрәтләү. Әҫәрҙең композицияһы.

З.Вәлидиҙең тормошо һәм ижады, дәүләт һәм ғилми эшмәкәрлеге. Башҡорт автономияһын төҙөү өсөн көрәше.

Эмиграцияға китеү сәбәптәре. Күренекле тюрколог ғалим булып танылыуы. Ә.Вәлиди – мемуарист. Мемуар тураһында төшөнсә. «Хәтирәләр» китабының йөкмәтке үҙенсәлектәре, унда балалыҡ, йәшлек, азатлыҡ өсөн көрәш йылдарын һүрәтләү. «Хәтирәләр»ҙә башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен, этнографияһын сағылдырыу. Китаптың әһәмиәте.

Әмир Әминевтың «Ҡытайгород» әҫәренең йөкмәткеһе, төп образдары.

Факиһа Туғыҙбаеваның «Ҡыңғырау», «Аҡмулла» әҫәрҙәренең төп темаһы, жанр-стиль үҙенсәлектәре.

## Әҙәбиәт

### Основная литература


1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990 – 1996 йылдар.

2. Башҡорт халыҡ ижады: 18 томда. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972 – 1985 йылдар.

3. Башҡорт шиғриәте антологияһы. Боронғонан алып XX быуат аҙағына тиклемге осор. – Өфө: Китап, 2001.

4. История башкирской литературы. В четырех томах. – Т.1. – Уфа: Китап, 2012. – 560 с.


### Дополнительная литература


1. Байымов Р. Судьба жанра. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1984. - 320 с.

2. Валитов И. Ижади үрҙәргә. – Өфө, 1986.

3. Вахитов Ә. Офоҡтар киңәйгәндә. – Өфө: , 1979.

4. Галин С. Тел асҡысы – халыҡта. – Өфө: Китап, 1993. – 224 б.

5. Килмөхәмәтов Т. Халыҡсанлыҡ көсө. – Өфө: Китап, 1998. - 464 б.

6. Килмөхәмәтов Т. Драматургия һәм драматургтар. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. - 269 б.

7. Нурғәлин З. Билдәлелек яҡтыһында. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. - 280 б.

8. Сөләймәнов Ә. Әкиәттә – хәҡиҡәт. – Өфө; Башҡортостан китап нәшриәте, 1997. - 400 б.

9. Хөсәйенов Ғ. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2010.
10. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2003. - 284 б.